ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

20-26 май (һабанай) 2017

№20 (750)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Яр буйҙары матурлана



4

Килмәк Нөрөшев



6

Һәр милләттең йола-традицияларында...

социаль тигеҙлек, социализм йәшәй



8-9

Үҙаллы дауаланма - онлайн-табиптан кәңәш һора



13

ТВ-программа 14

***Күп һанлы ахмаҡтар араһында аҙ һанлы яҡшыларға ҡаршы көрәшеүгә ҡарағанда, аҙ һанлы яҡшы кешеләр араһында күп һанлы ахмаҡтарға ҡаршы көрәшеү һәйбәтерәк.***

***(Антисфен).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәш быуындың өлгөлө тәртибе, яуаплылығы, маҡсатҡа ынтылышлылығы пионер ойошмаһы тарихында ғына тороп ҡалдымы икән?

***Сәлмән ЯРМУЛЛИН, "Аманат" (элекке "Пионер") журналының баш мөхәррире:*** Мин улай тип әйтмәҫ инем, сөнки тормоштан алып ҡарағанда, тәртибе, яуаплылығы, маҡсатҡа ынтылышлығы менән айырылып торған өлгөлө балалар ҙа, киреһенсә, тыңлауһыҙ, ялҡау, киләсәгенә битараф балалар ҙа әле лә бар, элек тә булды. Үҙем яҡшы белгән ғаиләләр миҫалында ла раҫлай алам быны. Мәҫәлән, бер туғанымдың улы бәләкәйҙән ныҡышмал, уҡыуға, эшкә тырыш булды. Бер ваҡытта ла дәрес ҡалдырманы, һуңламаны, киреһенсә, мәктәбенә иртүк тороп, иң беренсе булып барыу яғын ғына ҡарап торор ине. Шуныһы: уға аҡыл өйрәтеп, махсус тәрбиәләп тә ултырманы бит атаәсәһе. Үҙе шундай белекле, аңлы, аҡыллы, һәр ерҙә һәм һәр эштә беренсе, алдынғы булыу теләге менән айырылып торҙо. Мәктәпте алтын миҙалға тамамлап, Өфө дәүләт нефть техник университетына бюджет нигеҙендә уҡырға инде. Мәскәү вуздарына ла ингәйне, ата-әсәһе үҙ янынан ебәрергә теләмәне. Бының тап киреһе булған миҫалдар ҙа етерлек.

Заманалар, ваҡыт үҙгәреп торһа ла, кеше үҙгәрмәй. Һәр хәлдә, холоҡ-ҡылыҡтары менән йәштәр, үҫмерҙәр үткән быуаттарҙағы тиҫтерҙәренән әллә ни айырылып тормай, тиер инем. Юҡҡа ғынамы ни, беҙҙең эраға тиклем V быуатта йәшәгән аҡыл эйәһе Сократ та бит "...йәштәр боҙола, әҙергә, байлыҡҡа өйрәнгән, өлкәндәрҙе ихтирам итә белмәгән, ата-әсәһен тыңламаған" быуын үҫә тип, яҙып ҡалдырған. Бөгөнгөбөҙҙө хәтерләтә түгелме ана шул уҡ сифаттарға эйә йәштәрҙең әле лә арабыҙҙа йәшәп ятыуы?

Пионер ойошмаһы, әлбиттә, күпте бирә ине йәш быуынға, уныһын инҡар итеп булмай. Балаларҙы дөйөм изге башланғыстарға, уртаҡ маҡсаттарға туплау, дәртләндереү, ярҙамсыллыҡҡа өйрәтеү йәһәтенән тимурсылар командаһы ойоштороп, өлкәндәргә булышыу, тимер-томор һыныҡтары, иҫке ҡағыҙ йыйып тапшырыу, туристик походтарға сығыу, отряд, дружина сборҙарында тәртипһеҙ һәм насар уҡыған иптәштәренең "арт һабағын уҡытыу" кеүек саралар, һис шикһеҙ, әүҙем ҡарашлы, дөрөҫ балалар тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерҙе. Ләкин быны менән генә "насар" балалар юҡҡа сыҡманы: улар булды, әйтеүемсә, әле лә бар. Ниндәйҙер идеология, милли идеяларҙан бигерәк, заман һынауы идара итәлер, бәлки, йәш быуын аңы менән?

Яуаплылыҡ, тигәндән, бала сағы, үҫмерлек осоро һуғыш йылдарына тап килгән быуынды алайыҡ әле: ниндәй ауыр һынау, ил өҫтөнә ябырылған афәт әҙәм итә уларҙы! Үҙе, яҡындары өсөн генә түгел, ил яҙмышы өсөн дә яуаплылыҡты бала саҡтан тойоп, иңендә күтәреп үҫә бит улар! Бөгөнгө балаларҙы улар урынына ҡуйып ҡарау мөмкин дә түгел хатта, сөнки әлеге лә баяғы "әҙергә - бәҙер" өйрәнгән, быуынһыҙ, иркә балаларҙан XI быуат ни әүәләрен белеп булмай. Социализм осорондағы коммунистик идеология намыҫлы, кешелекле, ярҙамсыл, илһөйәрҙәр тәрбиәләүгә йүнәлтелгән булһа ла, ул бөтә балаларҙы ла тап шундай итеп үҫтерә алманы: енәйәтселәре лә, наркомандары ла, әрәмтамаҡтары ла булды. Бөгөнгөбөҙгә килгәндә инде, бер ниндәй идеология ла, милли идея ла юҡ, сөнки баҙар ҡоролошо, капитализмдың бер генә "идея"һы - ул да булһа - аҡса эшләү. Быйың хаҡына бәғзе берәүҙәргә йыш ҡына әхлаҡһыҙ юлға баҫырға тура килһә лә хатта.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ӨФӨБӨҘ БАЛАЛАРЫ...

## башҡортса әкиәт һөйләй

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсына йомғаҡ яһалды. Донъя халыҡтарының ауыҙ-тел ижадын һаҡлау, балаларҙың башҡорт телендә һөйләшеү оҫталығын арттырыу маҡсатында һигеҙенсе тапҡыр үткәрелгән был күркәм сараның ҡатнашыусылары тамашасылары серле әкиәт донъяһына сәйәхәт иттерҙе.**

**(Дауамы 5-се биттә).**



12+

✓ *Хәҙерге балаларҙы, пионер түгелдәр, тип, мин бер ҙә яманламайым. Киреһенсә, хатта бер аҙ көнләшеберәк тә ҡарайым уларға. Бала сағым әлеге заманға тура килгән булһа, мин күберәккә өлгәшә алыр инем, тип уйлайым.*



ӘЙТӘГҮР!



# МУЗЕЙҘАР ЙӘЛЕП ИТМӘЙМЕ?

**Бөгөн өйҙә генә ултырып, донъяның иң ҡиммәтле мәҙәниәт өлгөләре, тарихи ҡомартҡылар, әҙәби әҫәрҙәр менән танышыу мөмкинлеге бар барлыҡҡа. Әммә китапхана һәм музейҙарға йөрөмәҫкә күнегеп барыуыбыҙ яҡшымы? Ошо турала Башҡорт дәүләт медицина университеты студенты Айгөл Ғәйниәхмәтова менән фекер алыштыҡ.**

**➔ Музейҙарға йөрөгәнең бармы?**

- Бөгөнгө тормошобоҙҙа рекламаларҙың ҙур роль уйнауын беләбеҙ. Бына, мәҫәлән, Өфөләге театрҙарҙың иғландары һәр саҡ күҙ алдында булғас, ундағы спектаклдәрҙе ҡарап барырға тырышам. Ә бына музейҙар тураһында бер ниндәй ҙә күҙгә ташланырлыҡ мәғлүмәт-реклама юҡ. Баш ҡала музейҙарын күреү теләге "Музейҙар төнө" Бөтә Рәсәй акцияһы уҙғарылыуы тураһында мәғлүмәт уҡығас ҡына барлыҡҡа килде. Шул акция ваҡытында мин Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында, БР Милли музейында, БДМУ-ның Патологоанатомия музейында булдым. Каникулда Мәскәү ҡалаһында ял иткәндә Третьяков дәүләт галереяһына барҙым...

**➔ Музейҙар ниндәй тәьҫораттар уята?**

- Мәктәп йылдарында Асҡын районының тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында булып, төбәктең тарихы, урындағы халыҡтың көнкүреше, йолалары, тәбиғәте, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы райондаштар, райондан сыҡҡан билдәле шәхестәр тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, экспонаттар менән танышҡайным. Был музейҙа һаҡланған ҡомартҡыларҙы, боронғо фотоларҙы ҡараған сакта үҙемдең дә ошо тарихтың бер өлөшө икәненә төшөнгәйнем. Асҡын музейында өләсәйемдең фотоһы ла бар, был миндә оло ғорурлыҡ тойғоһо уятҡайны. БР Милли музейында һаҡланған ҡомартҡыларҙы ҡараған сакта тыуған тәьҫораттар иҫ киткес: беренсе тапҡыр тиерлек милләтем менән ғорурланыу тойғоһо барлыҡҡа килде, мин бит ошо бөйөк башҡорт халҡының ҡыҙы, был минең тарихым, тип уйландым. Балаларға, йәштәргә рухи тәрбиә биреү өсөн ошондай музейҙарҙы бер тапҡыр булһа ла күрһәтергә кәрәк тә ул.

**➔ Ни өсөн хәҙер музейға йөрөүселәр һирәк?**

- Халыҡ музейҙарҙы ҡарарға килһен өсөн уларҙы йәлеп итә белергә, ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Әгәр ҙә хатта баш ҡалалағы ҡайһы бер музейҙар тураһында ишетеп тә белмәйбеҙ икән, ниндәй ҡыҙыҡһыныу булһын? Ә былай бик күп йәштәр хәҙер тарих менән ҡыҙыҡһына, этник кейемдәр тегә, уҡ-һаҙаҡ эшләй, боронғо замандағы көнкүреш әйберҙәрен йыя, бер юлы тарихын да өйрәнә... Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа үткәрелгән "Музейҙар төнө" Бөтә Рәсәй акцияһы бик уңышлы проекттарҙың береһе булды, быйыл ул 20 майҙа уҙғарыласаҡ. Өфө музейҙарын барып күреү өсөн бик уңайлы мөмкинлек был.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәш быуындың өлгөлө тәртибе, яуаплылығы, маҡсатҡа ынтылышлылығы пионер ойошмаһы тарихында ғына тороп ҡалдымы икән?



(Башы 1-се биттә).

***Гөлфирә ӘХМӘТШИНА, педагогика ветераны, Благовар районы Иҫке Ҡусәрбай ауылы:*** Балаларҙы мин, элек яҡшы булдылар, хәҙер - насарҙар, тип ике осорға айырып ҡарамаҫ инем, сөнки балалар - һәр заманда ла шул уҡ балалар инде: төрлөһө бар. Пионер ойошмаһының тәрбиәүи әһәмиәте ҙур булды. Балаларҙы бәләкәйҙән үк тормошҡа, яҡшы, дөрөҫ йәшәү юлына әйҙәне. Иң тәүҙә Октябрь революцияһы көнө айҡанлы кескәйҙәрҙе октябрят итеп алалар ине. Был минең үҙемдең дә бала саҡтың тантаналы бер матур ваҡиғаһы булып иҫемдә ҡалған. Унан Ленин бабайҙың тыуған көнө - 22 апрелдә пионер сафына ҡабул итәләр. Тик унда тәртипле, яҡшы уҡыған балаларҙы ғына алалар, шуға күрә беҙ пионер сафына бөтөн класс менән бергә инер өсөн тырыша инек: бер-беребеҙҙе тартабыҙ, дөйөм тәртип һәм өлгәште яҡшыртырға, өлгөлө булырға тырыша инек. Бына ниндәй бер-берең өсөн яуаплылыҡ, ярҙамсыллыҡ, берҙәмлек тойғолары һалған аңыбыҙға пионерия! Унан инде комсомол буларға әҙерләнәһең, шуға ла аҙым һайын үҙеңдең пионер тигән исемгә лайыҡ булыуыңды раҫлайһың: яҡшы уҡырға, тәртипле булырға ынтылаһың, мәктәпкә көн дә ҡәҙерләп кенә пионер галстугын тағып киләһең. Ғөмүмән, пионер - ул иң тәүҙә тәртип, тигән һүҙ ине. Киләсәкте дауам итергә тейешле лайыҡлы алмаш итеп әҙерләнәләр беҙҙе. Бының менән аңыбыҙға ил яҙмышы, үҙ киләсәгебеҙ өсөн яуаплылыҡ, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләнгән, күңел төбөнә рух ныҡлығы кеүек сифат һалынған. Ул сақта әле, әлбиттә, рух ныҡлығы тигән төшөнсә әллә ни ҡулланылышта ла булманы, бала күңеле уны аңлап та етмәҫ ине, ләкин күңелгә һалынған. Әйтеүемсә, хәҙерге балаларҙы, пионер түгелдәр, тип, мин бер ҙә яманламайым, ғәйепләмәйем. Киреһенсә, хатта бер аҙ көнләшеберәк тә ҡарайым уларға. Бала сағым әлеге заманға тура килгән булһа, мин күберәккә өлгәшә алыр инем, тип уйлайым. Төрлө яҡлап үҫешер өсөн бик күп мөмкинлектәр асылды уларға, әйҙә, тырышһындар ғына.

***Венера СӘЙФУЛЛИНА, күп балалы әсә:*** Үҙемә совет осороноң һуңғы йылдарында пионер булып, галстук тағып йөрөү бәхете бер аҙ тейеп ҡалды, ә бына балаларыма идеалдар ҡыйралып, оло держава булып торған илебеҙҙең тарҡалып юҡҡа сыҡҡан, ҡырағай баҙар тип аталған осор башланған мәлдә тыуып, тәрбиәләнергә тура килде. Шуға ҡарамаҫтан, балаларым аңлы, яуаплы, тырыш булып үҫтеләр, белемгә, яңылыҡҡа тартылдылар. Икеүһе мәктәпте уңышлы тамамлап, береһе - Мәскәү, икенсеһе Санкт-Петербург университетында уҡып йөрөйҙәр. Ҡалған икеүһе әле мәктәп уҡыусылары. Улар ҙа уныштары, иплелектәре менән һөйөндөрә. VII кластағы улыбыҙ уҡыуынан тыш, робот техникаһы студияһында, спорт секцияһында шөғөлләнә. Бер генә буш ваҡыты ла юҡ. Аралашҡан иптәштәрен, класташтарын да яҡшы беләм, береһен дә яманлай алмайым, һәйбәт балалар үҫеп килә, иҫән-һау булһындар, тип теләйем. Төпсөк ҡыҙыбыҙ ҙа яҡшы уҡый, бейеү студияһына йөрөй. Пионер ойошмаһы булмаһа ла, яҡшы кешеләр булып үҫерҙәр, юғалып ҡалмаҫтар, тип уйлайым. Тыуған телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы белеүҙәре өсөн дә һөйөнәм: үҙ тамырҙарын онотмаясаҡтар. Бының менән мин шуны әйтергә итәм: бөгөн балаға пионерия бирмәгәнде ғаилә тәрбиәһе бирергә тейеш, тип уйлайым. Ә инде кемдер ҡыҙыҡһына икән,"Башҡортостан пионерҙары" ойошмаһы бөгөн дә бар, йәшәй бит ул! Унда балалар үҙ теләге менән йөрөй, бер кемде лә мәжбүр итеү, ирекһеҙләү тигән нәмә, бер ниндәй пафос юҡ. Элеккесә, кемдеңдер эше өсөн әҙер булыу, тигән ҡәтғи, фанатиктарса маҡсатты ла алға ҡуймай ул, ә тыныс ҡына балаларҙы дөйөм тормош ҡағиҙәләре буйынса йәшәргә өйрәтә. "Һәр бер пионерға үҙен, уны уратып алған донъяны аңларға һәм камиллаштырға өйрәтеп, Ватанының лайыҡлы гражданы булып үҫергә ярҙам итергә" тигән маҡсатты ҡуя был балалар ойошмаһы. Ҡағиҙәләре һәм тәртип-йолалары элекке пионер ойошмаһынан әллә ни айырылып та тормай. Мәҫәлән, уларҙың дөйөм ҡағиҙәләренән алынған бер нисә юл шул хаҡта һөйләй ҙә инде: "Пионер илен ярата, уның тарихын ҡәҙерләй, ил һаҡсыһы булырға әҙерләнә. Пионер кешеләргә иғтибарлы, уларҙың хеҙмәтен хөрмәтләй, үҙе лә хеҙмәт һөйә, ул - яҡшы дуҫ, бәлә килгәндә, иптәшен бер ваҡытта ла ташламай; пионер уныш нигеҙенең берҙәм хеҙмәттә икәнен аңлай; тәбиғәтте һаҡлай, ул баҫалҡы, маҡтаныу пионерға килешмәй; пионер өсөн төп командир - дөйөм сбор..." һ.б. Бынан тыш, Башҡортостанда тәбиғәттең йәш дуҫтарын, булаҫаҡ экологтарҙы берләштереүсе "Йәшел пионер" хәрәкәте лә популярлаша бара. Үҙ маҡсатын таба алмаған балалар бына ошо ойошмаларға йөрөп ҡарай ала. Киләсәккә аҙымдарын улар, бәлки, тап бына ошонда яһарҙар, кем белә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Ҡаҙанда (Татарстан) Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының Хәүефһеҙлек Советы секретары Николай Патрушев һәм Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың Волга буйы федераль округы төбәктәре етәкселәре менән берлектәге кәңәшмәһендә сығыш яһаны. Кәңәшмәлә терроризмды һәм экстремизмды иҫкәртеү буйынса саралар, шулай уҡ законһыҙ миграцияға ҡаршы эш итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостан парламентарийҙары Йәмәғәт палатаһының 10 ағзаһын билдәләне. Республика Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында граждандлыҡ йәмғиәте институтының яңы составының бер өлөшө өсөн тауыш биреү үтте. Йәмәғәт палатаһына һайланған ағзалар республика башлығы раҫлаған коллегалары менән бергә 15 көн эсендә палатаға тағы ла 10 ағзаны - урындағы йәмәғәт ойошмалары вәкилдәрен ҡабул итеү тураһында ҡарар ҡабул итергә тейеш.

✓Алдағы айҙа Башҡортостандың район һәм ҡалаларында һабантуйҙар уҙғарыла. Рөстәм Хәмитов тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Төбәк башлығы һабантуйҙар үткәреү графигын билдәләне һәм эштәр йөкмәтте. Байрамды ойоштороуға муниципаль районДарҙың һәм ҡала округтарының хакимиәттәре менән берлектә Башҡортостан Хөкүмәте яуап бирә.

✓Баймаҡ районындағы Төйәләҫ йылғаһы бик аяныс хәлдә, тигән хәбәр алғас та экологтар һәм Башҡортостан юлдаш телеканалының ижади төркөмө шунда юлланды. "Әгәр һеҙ ғәҙәти булмаған күренешкә тап булғанһығыҙ икән, "Башҡортостан юлдаш телевидениеһы яңылыҡтары" WhatsApp мессенджерына хәбәр ебәрегеҙ: 8-937-300-2023. Хәбәрселәр һәр осраҡты тиҙ арала асыҡларға әҙер", - ти "Башҡортостан" ТРК-ның матбуғат секретары Люциә Дәүлиева.

✓Башҡортостандың бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуға 2017 йылда республика Хөкүмәте өҫтәмә 3,9 миллиард һумдан ашыу бүләсәк. Уларҙан 2,3 миллиард һум муниципаль учреждение хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы буйынса йөкләмәләрҙе тәьмин итеү өсөн ҡала һәм район хакимиәттәренә йүнәлтеләсәк. Ҡабул ителәсәк саралар 142 меңдән ашыу мәғариф, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, фән һәм халыҡты социаль хеҙмәтләндереү өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең етешлеген күтәрергә мөмкинлек бирәсәк.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...

## ҡатмарлы фекерҙәре



### Тәжрибәләр ҡәҙере

Борондан тупланған иҫ киткес бай тормош тәжрибәләрен дөрөҫ ҡуллана белмәгән әҙәм балаһы һаман самокат уйлап сығарырға ярата, һаман да бер үк мөйөштәргә төкөй. Ниңә кешелек донъяһы күп өлгәштәрен бер-береһенән ҡыҙғанып, сер итеп һаҡлай? Берәүҙәр күптән өлгәшкәнде, икенселәр йылдар буйы хәтһеҙ ваҡыт, сығымдар, көс сарыф итеп, өр-яңы хаталар яһап, хәүеф-хафалар кисереп, яңынан уйлап табырға мәжбүр. Ҡайһы саҡ, ниндәйҙер тәжрибә донъяла бармы, юҡмы икәнен белергә теләп, ҡыҙыҡһыныуы түгел, белергә лә теләмәй, аңлы рәүештә тип уйларлыҡ, үҙенә, нәҫеленә үлемесле тәьҫир итерлек йәки йәшәгән мөхитенә зыян килтерерлек кире һөҙөмтәләргә тарыыу осраҡтары ла байтаҡ була.



Боронғо пирамидалар, Колизей, ҡәлғә-ҡалалар ниндәй ысулдар, ниндәй ҡорамалдар ҡулланып, кемдәр тарафынан төҙөлөүе тураһында аҡыллы баштар күптән бәхәсләшә, ләкин бөгөнгө көндәрҙә лә, фараздарҙан башҡа, бер ниндәй асыҡлыҡ юҡ. Мәғлүмәттең үҙ ваҡытында һаҡланмауы, быуындарҙан быуындарға бирелмәүе арҡаһында, ул тәжрибә юғалған. Беҙҙең эраға тиклем 20 быуаттан артыҡ ваҡыт элек ҡороп-төҙөлгән ҡоролмалар, үҙҙәренең мөһабәт ябайлығы менән һоҡландыра, уйландыра, аңды арбай. Бөгөнгө фәнни юғары технологияларға нигеҙләнгән тормошта йәшәгән әҙәми зат уларға тиң ҡоролма төҙөй алғаны юҡ.

Ҡасандыр кеше аңы уйлап табып, ҡулы эшләгән, ләкин кешелеккә әле лә серҙәрен асмаған боронғо мөғжизәләр Ер йөҙөндә бихисап. Улар хәҙерге кешелеккә тиклем дә ерҙә юғары технологияларға эйә камил үҫешкән цивилизациялар йәшәгәнен аңғарта. Боронғо ҡайһы бер артифакттарҙы кешелек бөгөн дә эшләргә һәләтһеҙ. Ҡайһы берҙәре сит планеталарҙан Ергә ебәрелгәнгә оҡшай, сөнки кешелек тә үҙенең тураһында мәғлүмәтте башҡа планеталарға аңғартырға тырыша бит...

Үткән быуындарҙың тәжрибәһен һаҡлауға яуапһыҙ мөнәсәбәт, уларҙың ҡиммәтле һөҙөмтәләрен юғалтыуға килтереп, кешелек үҙен күп уңайлыҡтарҙан мәхрүм итте. Был хәл элекке кеүек, бөгөн дә, аҡыл хазиналарын һаҡларға, үҙләштерергә бөтә мөмкинлектәр булған шарттарҙа ла, дауам итә. Бөтөн, таҙа, үҙенә таман алмаш кейем тапмайынса хатта хәйерсе лә өҫтөндәге кейемен һалып ташламай, ә кешелек, быуаттар, быуындар буйына бөртөкләп йыйған рухи ҡиммәттәренән, тормош тәжрибәһенән еңел баш тарта, сөнки кейем үҙенеке, ә рухи, мәҙәни, ғәмәли ҡиммәттәр дөйөм йәмғиәттеке. Бәлки, шуғалыр ҙа...

Әҙәм ғүмеренең ни тиклем ҡыҫҡа икәнен аңламай кеүек. Аңлаһа, үткәнен ихтирам итер, бөгөнгөһөнөң ҡәҙерен белер, киләсәген хәстәрләргә өйрәнер өсөн, йылдың тулы булмаған өс миҙгелендә генә сәселеп, шытып, үҫеп, башаҡланып, ем биргән игендән үрнәк алыр ине. Яҙ айында бер мәлдә төрлө уңдырышлы, уңайлыҡтары төрлө булған ергә төрлө сифатлы орлоҡтар бер тигеҙ, бер ысул менән сәселә. Ниһайәт, ниндәйҙер ҡөҙрәттән, көслөрәктәре алданыраҡ, мөсһөҙөрәктәре һуңғараҡ шытып сыға. Яраҡһыҙҙары бөтөнләй ерҙә ятып ҡала...

Үҫенте остоғо таш-ҡомдо ярып сығып, ғәйрәтләнеп, үргә ынтыла. Яҡтыға, Ҡояш нурҙарына мохтажлыҡ кисермәҫ өсөн башҡалар менән ярышып үҫә, яҡшы туҡланыр өсөн тамырҙарын нығыта, ел-дауылға бирешмәҫ өсөн һабағын ҡатыра, ҡыҫҡаһы, төп маҡсатына өлгәшер өсөн туҡтауһыҙ камиллаша. Мәле етеү менән һабаҡ төрлө төҫтәргә әйләнеп, тәбиғәт шарттарына яраҡлаша, һынауҙарға бирешмәҫлек булып нығына, башағын һаман өҫкәрәк күтәрә. Һабаҡ ныҡ баҫып торһон өсөн, башағын етерлек кимәлдә һутландырыр өсөн тамырҙары ишәйә, тармаҡлана, тәрәнерәк, киңерәк даирәләрҙе биләй. Ахырҙа, емдәре бешеп, етлегеп тирелгәнсегә тиклем башаҡты тотоп торор өсөн һабаҡ һап-һары, ҡоп-ҡоро көпшә һөлдәһенә ҡалып, үҙен ҡорбан итә! Орлоҡ төп маҡсат, унһыҙ тоҡом ҡорой! Үлән шуны яҡшы белә һәм йәшәү программаһын тайпылышһыҙ үтәй.

Игендең башағын эшкәртеп, емдәрен һуғып алалар, иң яҡшы сифатлыларын орлоҡҡа һалалар, эшкингәндәрен таҙалап ризыҡҡа ҡулланалар, хөртөрәктәрен, етлекмәгәндәрен малға ашаталар. Ә һабаҡтары, ә тамырҙары? Бер нәмәһе лә исраф ителмәй: һаламының күпмелер өлөшө мал аҙығына эшкәртелһә, ҡалғаны тамырҙары менән ерҙә ашламаға әйләнә, киләсәккә үсентеләргә йәшәү сығанағына әүерелә. Бында ла шул тәбиғи әйләнеш: киләсәге - орлоҡ, бөгөнгөһө - ризыҡ, үткәне - ашлама.

Әҙәм балаһы ла тормош тәжрибәһе менән шулай ҡуллана белһә, ғәмәлдән сыҡҡандарын иҫенә һалып, файҙалыларының мәнфәғәтен күреп, ҡиммәттәрен киләсәктә лә һаҡлау сараларын күрер ине. Иҫке менән мауығыусан, яңы менән ҡыҙыҡһыныусан әҙәм балаһы әлегә тиклем кешелек донъяһы үҙ тәжрибәһендә туплаған ыңғай һөҙөмтәләрҙе белеп, яңы менән иҫкенең нисбәтен самалап, файҙалана ла белмәй. Ул, киреһенсә, йә донъяһын онотоп яңыға ташлана йә, күҙҙәре томаланып, иҫкенең йоғонтоһонда йәшәй. Шул арала тормошоноң аҫты-өҫкә килә, үҙе торғонлоҡ йоҡоһона тарый, иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле тәжрибә өлгөләре юғала...

Кешелек тормош тәжрибәһенә ни тиклем һаҡһыҙ булыуын, яулаған сиктәренән еңел сигенеп, йәшәү рәүешен яттарса ҡороп маташыуын, үҙе йәшәгән дәүерҙә күҙе алдында тормошҡа ашҡан йә ашырға торған үҙгәрештәрҙә мәғлүм булған хәл-ваҡиғаларҙа күҙәтә. Мәҫәлән, элегерәк ата-әсәләр үҙҙәре ҡартатай, ҡартәсәй, өләсәй булғас та, шул оло дәрәжәләренә эске донъялары, тышҡы ҡиәфәттәре менән дә тоғро булырға тырышты. Ейән, ейәнсәрҙәре уларҙың иң олпатлы, иң сабыр, иң тотанаҡлы, ғаиләлә иң өлкән дәрәжәле кешеләр икәнен имсәк имеп ҡырын ғына ҡарап ятҡанда уҡ әсә һөтө менән аңдарына һеңдерҙе. Үҫә биргәс, ата-әсәһенең ҡартатай, өләсәйҙәренә ихтирамлы, иғтибарлы, тыңлаусан, уларҙың фекеренә һүҙһеҙ буйһоноусан булыуҙарын күреп, шулай булырға тейеш икәненә бар күңелдәре менән инанды. Шунан да тылсымлы һәм алдынғы тәрбиә ысулы юҡтыр!

*Бына тағы бөгөн Күккә баҡтым;*  
*Тылсым етмәй беҙгә ғүмерҙә.*  
*Тәнем Ерҙә ҡалды, йәнем осто*  
*Йондоҙҙарҙың хәлен белергә.*  
*Бына йәнем Айҙа. Тылсым ҡайҙа?*  
*Тирә-йүндә таштар, убалар,*  
*Ни афәттән ҡалған ҡыйралыштар?..*  
*Был бушлыҡты Ерҙә күргән бар!*

*Ары осто йәнем. Етегәнгә.*  
*Бәлки, уның барҙыр тылсымы?*  
*Ете туған бер туп булып оса,*  
*Ҡыумайҙыр бит уны талсыбыҡ...*  
*Күп йөрөнө йәнем Күк йөҙөндә,*  
*Йондоҙҙарҙың гиҙеп араһын.*  
*Табылманы тылсым дауаларлыҡ*  
*Йөрәгемдең уңмаҫ яраһын.*

*Юҡ, йөрөмә, йәнем, Күктән эҙләп*  
*Бәхет менән тәхет Ерҙәләр.*  
*Тағы ниндәй һиңә тылсым кәрәк,*  
*Йәнең менән тәнең бергәләр.*  
*Боронғолар әйткән, был донъяны*  
*Матурлыҡ һәм һөйөү ҡотҡарыр!*  
*Табынырлыҡ хаҡлыҡ булмаһа ла,*  
*Был һүҙҙәрҙә, бәлки, ҡот барҙыр...*

**Урал МОСТАФИН.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе - үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан спортсыһы Азамат Мусин кикбоксинг буйынса Рәсәйҙең абсолют чемпионы булды. Сибай ҡалаһының "Шоңҡар" клубы тәрбиәләнеүсеһе үҙенең чемпионлыҡ титулын дүртенсе тапҡыр иҫбатланы. 67 килограмға тиклем ауырлыҡта финал алышында ул Волгоград өлкәһенән көрәштәше Дмитрий Луняченконы еңде.

✓Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы донъялағы иң күп эскән илде билдәләне. Литва Европала һәм донъяла алкоголь иң күп ҡулланылған ил тип аталған: 2016 йылда унда йәшәгән кеше уртаса 16 литр эскән. Икенсе урында - Беларус, өсөнсө баҫҡысты Латвия биләй. Рәсәй Польша менән бергә исемлектә дүртенсе урынды бүлеште. Былтыр Рәсәй кешеһе уртаса 12 литрҙан ашыу спиртлы эсемлек ҡулланған.

✓Отечество.ру мәҙәни-мәғрифәтселек порталында "Еңеү ғаиләһе" бүлеге булдырылған. Уны тулыландырыуҙа Рәсәй һәм башҡа дуҫлыҡ мөнәсәбәтендәге илдәрҙең граждандары ҡатнаша ала. Быны өсөн Бөйөк Ватан һуғышын кисергән туғандарығыҙҙың һәм яҡындарығыҙҙың тарихын яҙып ебәрергә кәрәк. Бүлекте булдырыуҙа ҡатнашырға теләгәндәргә теркәлергә, мәҡәләне өҫтәргә йәки 9may@ote4estvo.ru почтаһына ебәрергә кәрәк.

✓Өфөлә "Музейҙар төнө" Бөтә Рәсәй акцияһына Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры ла ҡушыла. 20 майҙа киске сәғәт 6-ла театр балалар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн үҙ ишектәрен аса. "Музейҙар төнө-2017" барышында театрға инеү бушлай, киске сәғәт 6-нан 8-гә тиклем.

✓Башҡортостанда ташҡындан һуң тораҡ пункттар сиктәрендә йылға үҙәндәрен таҙартыу ойошторола. 2017 йылда ете йылғаның үҙәнен таҙартыу ҡаралған. Улар - Иглин районында Бәләкәс, Балтаста - Ҡыйғаҙы, Ауырғазыла - Ауырғазы, Саҡмағошта - Ҡалмаш, Күгәрсендә - Түбәнге йылға, Благоварҙа - Ҡармасан, Стәрлетамаҡ янында Стәрле йылғалары. Эштәр федераль ҡаҙнанан финанслана.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ошо йылдың апрелендә вакансияларҙың "хеҙмәт хаҡы" рейтингын иғлан итте. 1 майға республиканың вакансиялар банкында 39,4 мең эш урыны иҫәпләнгән. Шуларҙың 86 проценты - даими эш урындары. Вакансияларҙың 43 процентында тиерлек хеҙмәт хаҡы кимәле 20 мең һумдан ашыуыраҡ булған.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Төп маҡсат - Ағиҙелдең уң яҡ ярын һаҡлауҙы тәьмин итеү генә түгел, ә баш ҡаланың йөҙөн үҙгәртеү, ҡалаға аэропорт яғынан төрлө транспорт төрө менән ингәндә үк матур тәьҫораттар тыуҙырыуына өлгәшеү.*



БАШ ҠАЛАМ

# ОҠШАЙ. ОҠШАМАЙ...

**Етәксе урындарҙа эшләүселәр халыҡты: "Беҙ бит һеҙҙең өсөн тырышабыҙ. Ниңә беҙҙең эште күҙегеҙгә лә элмәйһегеҙ", - тигәнерәк һүҙҙәр менән битәрләһә лә, ҡайһы бер осраҡтарҙа ябай халыҡ менән дәрәжә биләүселәр араһында, ысынлап та, һикереп кенә сығып булмаҫтай упҡын хасил була ла ҡуя. Хатта был күренеш элекке "Аҫтағылар теләмәй, өҫтәгеләр булдыра алмай", тигән ҡанатлы һүҙҙәр тыуған замандарҙы ла хәтерләтеп ҡуя. Эйе, ниһайәт, халыҡ ниндәйҙер кимәлдә фекерен асыҡтан-асыҡ белдереү кимәленә етте, шикелле, әммә уларҙың әйткәненә ҡолаҡ һалыусы табылырмы? Бөгөн әүҙем уҡыусыбыҙ ғына түгел, әүҙем авторыбыҙ, Дим районының 123-сө мәктәбе уҡытыусыһы Миңһылыу АБДУЛЛИНА Өфө тураһындағы фекерҙәре менән бүлешә.**

➔ **Өфө ҡалаһы ни өсөн матур, тип яҙған татар шағиры Нәби Дәүли үҙ заманында. Бөгөн һеҙгә Өфөнөң ниндәй урындары оҡшай?**

- Үҙәк урамдарҙы биҙәп, матур фонтандар барлыҡҡа килде, театрҙарыбыҙ төҙөк, ғорур балҡып тора. Бик шәп ҡунаҡханалар ҡалҡып сыҡты. Яҙҙан алып көҙгә тиклем урамдарҙа төрлө сәскәләр күҙҙең яуын алып ултыра. Салауат һәйкәленең тирә-яғы хәҙер бөтөнләй күркәмләнде, ҡала халҡының иң яратҡан урынына әйләнде. Шулай уҡ ҡаланың йылдан-йыл йәшеллеккә күмелә барыуын да әйтмәй булмай. Мәктәп, төрлө хөкүмәт учреждениелары, офистар ҡәнәғәтләнерлек хәлдә.

➔ **Шулай ҙа эсегеҙҙе бошороп торған нәмәләр ҙә юҡ түгелдер?**

- Ундай мәлдәр ҙә бар инде. Мәҫәлән, Димдә урам, ихаталарға асфальт түшәүгә күп иғтибар бирелгән кеүек булһа ла, эшләнеп еткерелмәгәндәре лә осрай. "Орион" (әйткәндәй, "Арҡысаҡ" тип яҙып ҡуйылмаған) Балалар-үҫмерҙәр ижад йорто эргәһендәге Дельфиндар фонтаны булған бульварҙың Мусоргский урамына сиктәш аллеяһы емерек хәлдә. Шунан халыҡ күп йөрөй, мәктәпкә көн һайын йөҙләгән бала үтә унан. Һөрөнөп осорлоҡ. Шулай уҡ Димдәге 47-се поликлиниканың бүлексәләре биш-алты урынға һибелеп урынлашҡан. Халыҡ һаны һикһән меңдән уҙып киткән районда был хәлде күҙәтеү ҡыуаныс түгел, әлбиттә.

Бер шулай "Өфө-матбуғат" киоскыларынан "Башҡортостан" гәзитен эҙләнем. Ухтомский урамындағы почта бүлексәһендә лә, ике киоскыла ла был гәзит булмай сыҡты. Ни ғәләмәт икән был: Башҡорт иленең үҙәк ҡалаһында башҡорт телендә сыҡҡан баҫмаларҙы таба алма, имеш. Тағы, флешкандағы башҡортса яҙылған тексынды баҫтырам тиһәң, гел ҡаршылыҡҡа осрайһың. Башҡорт шрифты юҡ, тигән булалар. Башҡортостан территорияһында бөтөн компьютерҙарҙа ла башҡорт шрифты ҡуйылһын тигән күрһәтмә ҡабул итеү кәрәктер. Даими торған башҡорт шрифты бер кемгә лә зыян итмәй, рус телендәге текстарҙы баҫтырыуға ла ҡамасауламай бит.

➔ **Хыялығыҙҙа йөрөткән баш ҡалағыҙ ниндәй?**

- Әлбиттә, һәр башҡорт кеүек, мин дә уның йөҙөндә милли рух сағылышын күрергә теләр инем. "Өфө-II" тип йөрөтөлгән боронғо ҡалабыҙ урынында шәп музей ҡалҡып сығырына, Ағиҙел яры буйын артабан төҙөкләндереү планына "Урал батыр" эпосына бағышланған һәйкәлдәр ансамбленең инеп китеп, был урындың иҫ китмәле йөкмәткеле, ылыҡтырғыс булырына ныҡ өмөт итәм.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ЯР БУЙЫҘАРЫ МАТУРЛАНА

**Баш ҡалала Ағиҙел ярын нығытыу ҡоролмаларын төҙөү мәсьәләләре буйынса күсмә кәңәшмә үтте. Унда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәрхәд Самедов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, БР Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Рим Ғиләжетдинов, БР тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев һәм башҡалар ҡатнашты.**

Дәүләт заказсыһы БР Экология министрлығы булған гидротехник ҡоролмалар өс кимәлле шпунт сinvestigated-ҙарҙан торған нығытманан ғибәрәт. Беренсе этап төҙөлөшө 2014 йылда башҡарыла һәм 1,2 километр оҙонлоғондағы яр буйы нығытыла. Уны сафҡа индереүгә рөхсәт бирелгән һәм объект муниципаль милеккә тапшырылған. Күсмә кәңәшмә барышында яр буйының нисек буласаған күҙаллаған бер нисә вариант күрһәтелде. Яр буйы урамын реконструкциялау ямғыр һыуы канализацияһын эшләүҙе, тротуарҙар, велосипед юлдары һалыуҙы, баҫҡыстар ҡуйыуҙы, пандустар урынлаштырыуҙы, автомобиль юлдарын, тышҡы һәм архитектура яҡтыртыуын күҙаллай. Беренсе этап төҙөлөшө шуның менән тамамлана. Дөйөм алғанда, Ағиҙел яр буйы төҙөлөшө проекты дүрт этапҡа бүленә: Салауат Юлаев һәйкәленән алып "Йәшлек" комплексына тиклем (1,2 км); "Йәшлек" комплексынан, Дуҫлыҡ монументын да индереп, Пугачев урамына тиклем (2 км); Пугачев урамынан Ағиҙел (Бельская) урамына тиклем (0,92 км); Салауат Юлаев һәйкәленән Ағиҙел йылғаһы аша һалынған тимер юлы күперенә тиклем (0,8 км). Был объект "Башҡортостан Республикаһында экология һәм тәбиғәт ресурстары" Дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә башҡарыла. Уның төп маҡсаты - Ағиҙелдең уң яҡ ярын һаҡлауҙы тәьмин итеү генә түгел, ә баш ҡаланың йөҙөн үҙгәртеү, ҡалаға аэропорт яғынан төрлө транспорт төрө менән ингәндә үк матур тәьҫораттар тыуҙырыуына өлгәшеү һәм тағы ла бер иҫтәлекле ял итеү урыны булдырыу.

# ӘЙҘӘГЕҘ, ЭСМӘЙЕК!



**Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев хоҡуҡ һаҡлау органдарын Һуңғы ҡыңғырау көнөндә "ҡоро закон"дың үтәлешен тәьмин итергә саҡырҙы.**

Үткән йылдың декабрендә Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү һәм әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерҙе. Үҙгәрештәр "Һуңғы ҡыңғырау" байрамында республика биләмәһендә алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тулыһынса тыйыуҙы күҙ уңында тота. Ағымдағы йылдың ғинуарынан яңы закон көсөнә инде. Ошондай сикләү 25 майҙа тәүге тапҡыр ҡулланыла. "Уҡытыусыларҙың һәм ата-әсәләрҙең яңы сикләүҙе ыңғай ҡабул итеүҙәренә ышанам. Ул балаларҙың тормошондағы төп байрамдарҙың береһен үткәргән ваҡытта уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Мәктәп менән хушлашыу көнө ыңғай һәм шатлыҡлы тәьҫораттар менән иҫтә ҡалырға тейеш. Ваҡлап сауҙа итеүселәр яңы Законды аңлап ҡабул итерҙәр һәм уның талаптарына буйһонорҙар тип өмөтләнәм. Үҙ сиратымда хоҡуҡ һаҡлау органдарына Һуңғы ҡыңғырау көнөндә сикләүҙең тәүгә ғәмәлгә индерелеүен иҫәпкә алып, закондың үтәлешенә айырыуса иғтибар бүлеүҙәрен һорап мөрәжәғәт иткем килә", - тине төбәк парламенты спикеры.

# ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН ЮЛДАР



**Башҡортостанда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" федераль программаһын бойомға ашырыу һөҙөмтәһендә 2018 йылға проектҡа индерелгән Өфө агломерацияһы юлдарының яртыһынан ашыуын ремонтлау күҙаллана.**

Шулай уҡ юлдарҙа аварияniлар йыш теркәлгән урындарҙың һанын кәм тигәндә яртылаш кәметеү ҡаралған. Өфө агломерацияһы (Өфө һәм яҡын-тирәләге Өфө, Благовещен, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко һәм Шишмә райондары) "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" өҫтөнлөклө проектына индерелде, уның сиктәрендә иң тығыҙ магистралдәрҙе төҙөкләндереү һәм реконструкциялау күҙаллана. Был программаға Рәсәйҙең 34 төбәге ингән. Программа 2025 йылға тиклем йыл һайын республикаға федераль ҡаҙнанан 1 миллиард һум аҡса бүлеүҙе күҙ уңында тота. Төбәк һәм урындағы бюджеттарҙан да ошондай уҡ күләмдә берлектә финанслау ҡаралған.

# ЙОРТТАР ЯҢЫРТЫЛА



**Өфөлә күп фатирлы йорттарҙа дөйөм милекте капиталь ремонтлауҙың республика программаһы тормошҡа ашырыла. Көндәр йылыныу менән был эш тағы ла етеҙерәк темптар менән башҡарыла. Быйыл 1200 күп фатирлы йортто ремонтлау планлаштырылған. Әлеге ваҡытҡа 142 йортта эштәр тамамланған, 500-өндә эштәр раҫланған график буйынса бара.**

Капиталь ремонт эшләү зарурлығын муниципалитеттар хәл итә. Ҡарар ҡабул итеү өсөн һәр хакимиәттә йорттарҙа йәшәүселәр ҙә индерелгән комиссиялар төҙөлә. Шуны ла билдәләп китеү мөһим - программаны тормошҡа ашырыу халыҡтың иғәнәләрҙе нисек түләүенә лә бәйле. 2014 йылдан алып тотош республикала капиталь ремонт өсөн иғәнәләр йыйыу 83 процентҡа үтәлә, быйыл ул дүрт айҙа 89,8 процент тәшкил иткән. Ваҡытында иғәнә индермәгән йәки быға бөтөнләй күҙ йомоп ҡараған граждандар менән Төбәк операторы судҡа тиклем һәм суд эштәре алып бара, уҙған 4 айҙағы шундай эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә 10 миллион һумдан ашыу аҡса йыйылған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың Милли музейында Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылына арналған "Йәйғор балҡышы" художестволы кейеҙ күргәҙмәһе асыла. Эштәрҙе Өфө районындағы Балалар ижады йортоноң "Йәйғор" студияһы рәссамдары башҡарған. Улар художестволы кейеҙ техникаһында 40-ҡа яҡын панно эшләгән. Эштәрҙең авторҙары - Өфө районының Нөрлө ауылынан 12-15 йәшлек балалар. Студия етәксеһе - Нәфисә Ғилметдинова.

✓Башҡортостанда тораҡ пункттарҙы таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса экологик айлыҡ тамамланды. Шәмбе өмәләрендә 1,3 миллион самаһы кеше ҡатнашты, тип иҫәпләнеләр Башҡортостан Экология министрлығында. Полигондарға 47 мең тонна сүп-сар сығарылды. 414 мең "квадрат" юл һәм 134 мең погон метр ҡойма йүнәлтелде. Парктарҙа, кешеләрҙең күмәк ял итеү урындарында 600 мең үҫенте ултыртылды.

✓Йыл башынан Өфөлә рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 300-ҙән ашыу кешегә кәмегән һәм бөгөнгө көнгә алты мең самаһы тәшкил итә. Мәшғүллек хеҙмәтендә Өфөнән бөтәһе 6,4 мең кеше иҫәптә тора. Вакантлы эш урындарының иҫәбе йыл башы менән сағыштырғанда 11,3 меңдән 15 меңгәсә артҡан.

✓23-27 майҙа Өфөлә боулдеринг буйынса Рәсәй чемпионаты, тиҙлектә һәм ауырлыҡта бөтә Рәсәй ярыштары уҙғарыла. Ярыштарҙа 26 төбәктән спортсылар ҡатнаша. Турнирҙар илдең иң ҙур скалодромы "Күл-Тау"ҙа асыҡ һауала ойошторола. Адресы: Зорге урамы, 63/3. 23 майҙа ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр "ауырлыҡта" көс һынаша, ярыштар көндөҙгө сәғәт 2-се яртыла башлана, шул уҡ ваҡытта сараны асыу тантанаһы була. 24 майҙа "ауырлыҡта" ярыштар дауам итә, 25-дә - "тиҙлек", 26-27 майҙа - боулдеринг.

✓Өфөлә пенсионерҙарҙы һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе М.В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейына бушлай экскурсияға саҡыралар. 24 майҙа унда "Япония сәнғәте" күргәҙмәһе буйынса тематик экскурсия уҙа. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана. Ижади осрашыуға 279-12-59 телефоны буйынса йәки srt@ufacity.info электрон почта аша алдан яҙылырға кәрәк.

# ЯҢЫ ПРОЕКТТАР ҠУЛЛАНЫЛА



**Муниципалитет аҙна һайын үткән оператив кәңәшмәләрҙә инновацион юғары технологиялы продукция сығарыусы уңышлы проекттар менән таныштырыуҙы дауам итә.**

Үткән аҙнала технологик объекттарҙы автоматлаштырыу, телемеханизациялау, янғынға ҡаршы һаҡ системаһы, бәйләнештәр селтәре һәм мәғлүмәт именлеге өлкәһендә комплекслы проекттарҙы тормошҡа ашырған "СибКом" акционерҙар йәмғиәте эшмәкәрлеге хаҡында мәғлүмәт бирелде. Ойошманың төп заказсылары булып илдең иң эре нефть компаниялары тора. Ул яңы инновацион предприятиелар асып, халыҡты эш менән тәьмин итә, үҙенең төп эшмәкәрлегенән тыш, социаль өлкәгә лә ҙур иғтибар бүлә, хеҙмәткәрҙәре өсөн торлаҡ программаларын тормошҡа ашыра, тәҡләныу, мәҙәни һәм спорт саралары ойоштора, белемдәрен камиллаштыра. "Беҙ урындағы технологик ресурстарҙы, проект ҡарарҙарын файҙаланырға тейешбеҙ, - тине Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ултырышта. - Компания илдең нефть-газ, нефть эшкәртеү, нефть химияһы комплексы менән уңышлы эшләй. Унда күрһәтелгән хеҙмәттәргә һәм етештергән изделиеларға иң юғары талаптар ҡуйыла. Шуға күрә, иғтибар итегеҙ. Беҙ урта һәм бәләкәй бизнесҡа ярҙам итергә тейешбеҙ".

# НАВИГАЦИЯ БАШЛАНДЫ



**29 апрелдә баш ҡалала йылғаларҙа навигация осоро башланды. Ул 16 октябрҙә ябылырға тейеш. Ләкин һауа торошонон үҙгәреүе был датаға йоғонто яһауы ла мөмкин.**

- Һуңғы дүрт йылда пассажирҙар ағымы тотороҡланды, - тип билдәләне ҡала мэры Ирек Ялалов. - 2000 йылдар башында 1 миллиондан ашыу пассажирҙы хеҙмәтләндерә инек. Бөгөн тиҫтә йылдар дауамында кәмегән һан ҡабат тотороҡлана башланы. Бында, әлбиттә, Пугачев урамы киҫелешендә күпер төҙөү ҙә үҙ йоғонтоһон яһаны. Элек унда йылға аша сығыу урыны ине, күпер төҙәлгәс, йылға аша сығыусы пассажирҙар һаны ла кәмене. Хәйер, дөйөм алғанда, баҡсасылар ҙа аҙая.

Ирек Ишмөхәмәт улы халыҡтың йылға аша сығыу хеҙмәте менән ҡәнәғәт булыу-булмауын асыҡларға, иҡтисадты яҡшыртыу өсөн муниципаль предприятиеларға кәрәкле ярҙам күрһәтергә ҡушты.

# ТЫҒЫНДАР БУЛМАҺЫН



**Быйыл Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" федераль программаһы сиктәрендә 29 юл участкаһында ремонт эштәре үткәреләсәк.**

Хәрәкәт итеүҙә проблемалар булмаһын өсөн Ирек Ялалов интерактив ресурс булдырыу бурысын йөкмәтте. Интерактив картала күн һайын ремонт барған урындар күрһәтеләсәк. Уның буйынса водителдәр үҙҙәренең маршрутын үҙгәртә ала. Күптәрҙең "Яндекс-тығындар" сервисы менән ҡулланыуын иҫәпкә алып, "Яндекс" компанияһы менән килешеү төҙөү ҙә планлаштырыла.

- Юлдарҙа ремонт барғанда ҡала халҡына унайһыҙлыҡ тыуҙырмаҫ өсөн бындай интерактив ресурстар ярҙам итер тип өмөтләнәм. Әлбиттә, ниндәйҙер дәрәжәлә унайһыҙлыҡтар буласаҡ, әммә барыһы ла өфөләрҙең унайлылығы хаҡына эшләнә, - ти ҡала хакимиәте башлығы.

АФАРИН!

# ӨФӨБӨҘ БАЛАЛАРЫ...

## башҡортса әкиәт һөйләй

**(Башы 1-се биттә).**



"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсының һуңғы этабында быйыл район кимәлендә еңеү яулаған балалар баҡсаһынан 21 тәрбиәләнеүсе, урта белем биреү учреждениеларынан 21 уҡыусы, 26 фольклор коллективы ҡатнашты. Ойоштороусылар әйтеүенсә, был иң яҡшы сығыш яһаған ҡатнашыусылар 400 яңғыҙ башҡарыусы балалар һәм 83 фольклор коллективы араһынан һайлап алынған. Конкурсанттар яңғыҙ башҡарыусы, әкиәтте сәхнәләштереү, мультипликацион һәм анимацион фильм, ижади эштәр күргәҙмәһе номинациялары буйынса бүләкләнде. Әйткәндәй, был конкурс сиктәрендә донъя халыҡтары әкиәттәре буйынса мультипликацион һәм анимацион фильм төшөрөү, ижади эштәр тәҡдим итеү мөмкинлеге быйыл ғына индерелгән яңылыҡ. Балаларҙың ятраҡан әкиәт геройҙарына бағышлаған сағыу ҡул эштәре менән Өфө ҡалаһы район мәғариф бүлектәре ойошторған күргәҙмәләрҙә танышырға була ине.

Баш ҡала конкурсы гала-концертында иң юғары баһа алған кескәй һүҙ оҫталарын Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, мәғариф идараһы етәксеһе Елена Хаффазова, Бөтөн донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, БР Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры урынбаҫары Альмира Ҡолдәүләтова, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы Риф Әхмәҙиев, БР Мәғариф министрлығы вәкилдәре, ҡаланың белем биреү учреждениелары етәкселәре тәбрикләне. Сынтимер Биктимер улы "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсы ысын мәғәнәһендә Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телен, мәҙәниәтен һәм ауыҙ-тел ижадын данлаған байрамдарҙың береһенә әйләнеүе тураһында белдерҙе. Бала күңелендә үҙ халҡының рухи ҡомартҡыларына ҡарата иғтибар, туған теленә һөйөү тәрбиәләгән ата-әсәләргә һәм педагогтарға рәхмәтен еткерҙе. Быйыл 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Нургиз Ғәлиастанов һәм М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы уҡыусыһы Нурсилә Фазлетдинова конкурстың абсолют еңеүселәре тип табылды. Ә бына әкиәтте сәхнәләштереүселәр араһында "Аҡбуҙат" 75-се башҡорт балалар баҡсаһы һәм 122-се Башҡорт гимназияһы коллективтары Гран-при яуланы. Бөтә ҡатнашыусыларға ла иҫтәлекле бүләктәр, байрам кәйефе бүләк итеү был конкурсҡа хас сифаттарҙың береһе булыуын белабеҙ. Был юлы ла туған телендә шартлатып әкиәт һөйләгән, сәхнә түрендә үҙен иркен тотоп, актерлыҡ һәләттәрен күрһәткән талантлы бер бала ла иғтибарһыҙ ҡалманы. Һәр кем үҙенең бүләген алып, киләһе йыл да ҡатнашырға теләк белдереп, ҡанатланып таралышты.

ҠЫҪҠАСА

# ЙӘШТӘРГӘ - ТОРЛАҠ!

✓ **15 майҙан Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты тәүге бала тыуғанда ғаиләгә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе алыуға ғаризалар ҡабул итә башланы.** Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, бындай түләүгә ике меңдән ашыу ғаилә дәғүә итә ала. Социаль түләү 35-тән уҙмаған, республика Хөкүмәте билдәләгән тәртиптә торлаҡҡа мохтаж тип табылған, 2017 йылдың 1 ғинуарынан 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем беренсе балалары донъяға килгән ғаиләләргә бирелә. Тулыраҡ мәғлүмәтте Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты сайтында алырға мөмкин.

✓ **Мәскәүҙә Рәсәйҙең мәғариф һәм фән министры Ольга Васильева ислам тарихын һәм мәҙәниәтен тәрән белгән белгестәр әҙерләүҙе тәьмин итеү йәһәтенән саралар планын үтәүҙе ойоштороу һәм контролдә тотоу буйынса эшсе төркөм ултырышын уҙғарҙы.** Ултырышта ошо саралар планын тормошҡа ашырыусы юғары уҡыу йорттары, шулар иҫәбендә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ла ҡатнашты. Университет ректоры Раил Әсәҙуллин билдәләүенсә, улар 24 майҙа Өфөлә "Йәштәр араһында экстремизм һәм терроризм идеологияһы таралыуға ҡаршы эш итеү" ғилми-ғәмәли конференцияһы уҙғарсаҡ.

✓ **Ҡаланы сүп-сарҙан таҙартыу, урамдарҙы һәм тротуарҙарҙы йыуҙыртыу буйынса көндәлек эш алып барыла.** Әммә баҡса миҙгеле башланыу менән дача участкаларында булыусыларҙың юл ситтәрендә һәм ҡала транспорты туҡталыштарында сүп-сар, көнкүреш ҡалдыҡтарын ҡалдырыу осраҡтары ла йышая. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, Ҡала хеҙмәттәре баҡсасылыҡ территорияларынын сүп-сар сығарыу өсөн махсус хеҙмәттәр менән килешеү төҙөргә саҡыра.

✓ **Баш ҡала территорияһын рөхсәтһеҙ урынлаштырылған, күп осраҡта улар коммерция эшмәкәрлеге өсөн файҙаланылған гараждарҙан таҙартыу дауам итә.** Уртаса алғанда, бер аҙнала 50 металл бокс һүтелә. Бушап ҡалған урындарҙа нимә урынлаштырырға икәнлеген ошо территорияла йәшәүселәр хәл итә.

✓ **28 майҙа беренсе I BIKE UFA велосипед фестивале үтәсәк.** Был көндә Өфө үҙегендә донъя рекорды ҡуйыласаҡ, велоквест, велоуҙыш үткәреләсәк, сағыу концерт ойоштолосаҡ, интерактив майҙансыҡтар эшләйәсәк. Сара барышын социаль селтәрҙәрҙә #ibikeufa #ломаябарьеры хештегтары буйынса күҙәтеү мөмкин буласаҡ.

✓ **23 - 26 майҙа Өфөлә "Бизнес аҙналығы - 2017" уҙғарыла.** Унда иң яҡшы коучтар һәм бизнес-тренерҙар көн һайын оҫталыҡ дәрестәре, семинарҙар, тренингтар, консультациялар үткәрәсәк. Белгестәр хыялында йөрөткән эшенде нисек асыу, нисек персонал алыу, продукт йәки хеҙмәт күрһәтеү, үҙеңдең уңышлы брендыңды булдырыу тураһында һөйләйәсәк. Сара киске сәғәт биштән төнгө 10-ға тиклем Ҡала проекттарын үҫтереү фондында (ВДНХ-ДОМ) барасаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йоҡоһоҙлоктан

❖ Тигеҙ күләмдә бөтнөк, мәтрүшкә, боланут үләндәрен ҡушып болғатырға, кисен 1 ҡалаҡ ошо үлән ҡатнашмаһына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм 1 стакан эсергә. Көндөҙ йәшел сәйгә өҫтөнлөк бирергә, уға бер аҙ бөтнөк өҫтәгеҙ. Был эсемлек нервы системаһын тынысландыра, баш ауыртыуын баҫа.

❖ 1 ҡалаҡ бесәй үләне тамырына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 1 ҡалаҡ төнәтмәгә 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә, 15 минут һыуы ҡайнап ултырған кәстрүлдә тоторға, 10 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр, 1-әр ҡалаҡ эсергә. Төнәтмәләрҙе артыҡ эсергә лә ярамай, билдәләнгән дозаны мотлаҡ күҙәтегеҙ. Юғиһә, киреһенсә, хәлһеҙлек, баш ауыртыуы йонсотасаҡ.

❖ Аҙнаһына бер тапҡыр тоҙ өҫтәлгән ванна инергә. Йышыраҡ ҡулланһаң, организм өйрәнә лә, тоҙло һыу тынысландырыу көсөн юғалта.

❖ Төнгә ҡарай ныҡ итеп ашарға, сәй, ҡәһүә эсергә тырышмағыҙ.

## Баш ауыртыуынан

❖ 1 стакан ҡайнар һыуға 15 грамм мелисса өҫтәргә, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 5-6 тапҡыр 1-2-шәр ҡалаҡ эсергә. Был дауа баш ауыртыуынан ғына түгел, йоҡлай алмағанда, эсәктә һауа йыйылғанда, ҡолаҡ шаулағанда, аҙ ҡанлылыҡта ҡулланыла.

❖ 1 ҡалаҡ мәтрүшкә үләненә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 0,5-1-шәр стакан эсергә. Ауырлы ҡатындарға ҡулланырға ярамай.

❖ Дарыухананан ментол майы һатып алығыҙ һәм баш ауыртҡанда маңлайға, сикәләргә, ҡолаҡ артына, елкәгә һөртөргә.

❖ Баш ауыртҡанда сәй ҙә ярҙам итә. Йәшел йәки ҡара сәйҙе бешерергә, бер семтем бөтнөк үләне өҫтәргә. Бер сынаяҡ сәйҙән һуң баш ауыртыуы үтә.

## Күреү һәләтен яҡшыртыу

❖ 2 ҡалаҡ арыслан ҡойроғо үләненә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 40 минуттан һөҙөргә һәм 15.00, 18.00, 21.00 сәғәттә 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. 10 көн ял итеп алғандан һуң, тағы ҡабатларға.

✓ *Башҡорттар Ырымбур экспедицияһының үҙҙәре менән килешелмәгән һәм улар мәнфәғәтенә тап килмәгән ғәмәлдәренә ҡаршы көрәшергә әҙер тороуҙарын һәм көстәрен күрһәтеүгә өлгәшә.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Бала сағы

Ғәрәп тарихсылары мәғлүмәттәре буйынса, Мөхәммәт 570 йылдың 29 авгусында тыуа. Уның атаһы Әбдаллаһ, ике айҙан, Сүриәнән Мәккәгә ҡайтып килешләй вафат була. Улын күреп өлгөрмәй ул. Мөхәммәткә мираҫ булып биш дөйә, бер нисә һарыҡ һәм Бәрәкәт исемле ҡол ҡатын ғына тороп ҡала.

Туҙанлы һәм эҫе Мәккә һауаһы бәләкәй балаларҙың һаулығын ныҡ ҡаҡшата. Шуға ла Мәккә кешеләре, ғәҙәттә, йәш балаларын күсмә тормош алып барыусы ғәрәптәргә тәрбиәгә бирер булған. Мөхәммәтте Хәлимә исемле ҡатынға тапшыралар. Шулай итеп, алты айлыҡ Мөхәммәт әсәһенән айырыла ла, дүрт йылға яҡын Бану Саад ырыуында тәрбиәләнә. Хәлимә менән ире, Әл-Хәрис, Мәккә ҡалаһынан ике йөҙләгән километр арала, тауҙарҙа мал аҫырап йәшәй.

Мәккәгә ҡайтҡандан һуң Мөхәммәт алты йәштәргә тиклем әсәһе менән көн күрә. Тик әсәһе Йәҫриб ҡалаһынан, туғандарында ҡунаҡ булғандан һуң ҡайтып килешләй, вафат булып ҡуя.

Хәҙер инде Мөхәммәттең артабанғы яҙмышын хәстәрләүҙе нәҫел башлығы Әбд-әл-Мотталиб үҙ өҫтөнә ала. Уның күрһәтмәһе буйынса бөтөн туғандар сиратлап Мөхәммәтте ашата, кейендерә һәм йәберзоломдан ҡурсалай. Мөхәммәттең һигеҙ йәше тулыуға Әбд-әл-Мотталиб донъя ҡуя. Хәҙер инде Мөхәммәт Хашим нәҫеленең яңы башлығы, Әбд-әл-Мотталибтың өлкән улы Әбү Талиб ҡарамағында ҡала.

Әбү Талибҡа атаһынан ярлылар өсөн һалым йыйыу һәм уны таратыу вазифаһы мираҫ рәүешендә ҡала. Зәм-зәмде һаҡлау уның ҡустыһына, Ғәббәскә йөкмәтелә.

Әбү Талиб йәштән үк дингә, илаһтарға иҫе китеп бармай. Ул эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә, каруандарын күберәк үҙе йөрөтә. Туғандарын да үҙ эшенә йәлеп итә. Хәҙер инде уға эшҡыуарлыҡтан тыш, нәҫел башлығы булараҡ та көс төшә. Уға бөтөн туғандарын ҡурсаларға, улар араһында ваҡыты-ваҡыты менән сығып торған бәхәстәрҙе хәл итергә, ауыр хәлләренә ярҙам итеү юлын эҙләргә, йыйылыштарға йөрөп, нәҫеленең мәнфәғәтен ҡайғыртырға һәм башҡа төрлө мәсьәләләргә ваҡытының бер өлөшөн сарыф итергә тура килә. Хашим нәҫеленең башлығы булараҡ, ул Мәккәнең ихтирамлы һәм вазифалы кешеләре алдында абруй һаҡларға ла тейеш була. Бының өсөн ул ырыуының ғөрөф-ғәҙәттәренә тоғро булырға, шәхси тормошонда ла, ғаиләһендә лә исеменә тап төшөрмәҫкә, һәм, ғөмүмән, ғәрәптәрҙең ысын ир тигән идеалына бөтөн яҡтан да тап килеп, башҡаларға өлгө булырға тейеш була.

Әйтергә кәрәк, Әбү Талиб был талаптарҙың бөтөнөһөн дә ихлас, теүәл үтәй һәм тиҙ арала Мәккәнең иң ихтирамлы кешеләренең береһенә әйләнә. Ул Мөхәммәткә ҡарата ла ихлас була. Матур кейендерә, ашата-эсерә, ҡурсалай. Тик яҙыу-уҡыуға ғына өйрәтмәй. Бында уның ғәйебе юҡ. Мөхәммәт үҙе лә олатаһын бының өсөн бер ҡасан да ғәйепләмәй. Сөнки ул саҡтарҙа ғәрәптәрҙең байтағы уҡый-яҙа белмәй, күптәренә был кәрәкмәй ҙә - үтә мәшәҡәтле, өйрәнеү ҙә ҡиммәткә төшә. Шуға күрә киләсәктә уҡый-яҙа белеү артабанғы һөнәре өсөн мотлаҡ кәрәк буласаҡ, тигән балаларҙы ғына уҡырға-яҙырға өйрәтәләр. Әммә Әбү Талиб Мөхәммәтте бәләкәйҙән үк сауҙа, каруандар йөрөтөү эшенә өйрәтә. Мөхәммәт олатаһынан тауарҙарҙы нисек һаҡларға, нисек үлсәргә, сифатын, хаҡын билдәләргә, һатыулашырға һәм сауҙа эше өсөн мөһим булған башҡа кәлептәрҙе үҙләштерә. Сүллектәрҙә каруандарҙы йөрөтөү өсөн дөйәләрҙе лә дөрөҫ итеп тәрбиәләй белеү талап ителә. Мөхәммәт был эште лә камил өйрәнә.

Әбд-әл-Мотталиб һәм Әбү Талиб миҫалдарынан күреүебеҙсә, нәҫел, ырыу башлығы, аҡһаҡал булыу - хөрмәтле вазифа ғына түгел, ә бик яуаплы бурыс һәм уны башҡарған кешеләр төрлө яҡлап камиллыҡҡа өлгәшеп абруй яуларға тейеш булған. Улар - нәҫел, ырыу йөҙө, ырыу аҡылы. Был йәһәттән дә ғәрәптәр һәм башҡорттар, шулай уҡ башҡа боронғо халыҡтар менән тура параллель үткәрергә була.

**(Дауамы бар).**

*ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

**Хәбәр иткәйнек инде: бөгөн, 20 майҙа Ишембай районында юрматылар йыйын ойоштора, Торатау буйына аҡ тирмәләр ҡороп, Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Мәләүез, Ауырғазы, Ғафури, Баҡалы райондарында, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалаларында, Ырымбур өлкәһендә, Татарстанда, Венгрияла йәшәүсе ырыуҙаштарҙы ла, башҡа ырыу вәкилдәрен дә, сит-ят тарафтарҙан килгән ҡунаҡтарҙы ла бер ҡорға йыя. Торатау буйындағы байрам программаһына Килмәк абыҙ Нөрөшев кубогына традицион яндан уҡ атыу буйынса турнир ҙа индерелгән.**

# КИЛМӘК НӨРӨШЕВ



Эйе, башҡорт тарихында оло эштәр, юйылмаҫ эҙҙәр ҡалдырған батырҙарыбыҙ бихисап. Килмәк Нөрөшев та шундай фиҙаҡәр шәхестәребеҙҙең береһе. Юрматы ере батыры, 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе булған ул. Иң мөһиме, ниндәй генә яуҙарҙа йөрөгән, ниндәй генә вазифалар биләгән шәхес булмаһын, уны "абыҙ" тигәндәр. Башҡортта "абыҙ" иң уҡымышлы, иң зыялы, иң юғары дәрәжә яулаусыға ғына бирелә торған вазифа ул. Беҙ Кинйә абыҙҙы беләбеҙ, бынын беҙҙең Килмәк абыҙ. Тағы кемдәрҙе атай алабыҙ? Тимәк... Ошоға тиклем беҙ бөйөк кешебеҙ Килмәк Нөрөшев тураһындағы хәтерҙе ҡуҙғатмай йәшәгәнбеҙ булып сыға. Бәлки, киләсәктә йәш тарихсыларыбыҙҙан кемдер был шәхесебеҙ хаҡында тулыраҡ материалдар табыр, бәлки, яҙыусыларыбыҙҙан кемдер ошо Юрматы батыры тураһында роман яҙыр, ә Айнур Асҡаров һымаҡ егеттәребеҙ тарихи геройҙарыбыҙ тураһында кинолар төшөрөргә өлгөрөп етер? Өмөт итәйек. Ә хәҙергә фиҙаҡәр тарихсыларыбыҙҙың береһе, Ишембай егете Юлдаш Йосоповтың ошо яҙмаларын уҡый торайыҡ һәм Торатау буйындағы йыйында йөрөгәндә "Кем ул Килмәк Нөрөшев?" тип һорау биреүселәр араһында ошо мәғлүмәт менән уртаҡлашайыҡ.

Килмәк абыҙ Нөрөшев. XVIII быуаттың Нуғай даруғаһы башҡорт аристократтары вәкилдәренең береһе. 1706-1707 йылдарҙа Ҡырым ханы менән Осман солтанына ебәрелгән башҡорт илселеге составында ул да була. Килмәк Нөрөшев 3 мең кешелек отряд туплап, 1735 йылдың июнендә баш күтәрә.1736 йылдың ахырына тиклем Нуғай даруғаһы ихтилалын етәкләй.

Ырымбур экспедицияһы әҙерләнеүе хаҡында башҡорттар 1734 йылда ул саҡ Петербургта булған башҡорт старшинаһы һәм мулла Тоҡсура Әлмәковтың хатынан беләләр. Хат Килмәк Нөрөшевҡа төбәп ебәрелгән була. 1734 йылдың декабрендә Килмәк абыҙ бөтөн Башҡорт ҡоролтайын саҡырыуҙы башлап йөрөүселәрҙең береһе була. Батша хөкүмәте тарафынан башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуҡтарын, дини һәм башҡа йолаларын боҙоу, шулай уҡ һалымдарҙың арта барыуы, унан ҡала һалым йыйыусы урыҫ чиновниктарының баш-баштаҡлыҡтары ихтилалға күтәрелеүҙең сәбәпсеһе булып тора. Ә шулай ҙа төп сәбәп Ырымбур экспедицияһы эшмәкәрлеге була.

П.И. Рычков раҫлауынса, башҡорттар "...бөтөн көстәрен һалып ҡаршылашырға һәм Ырымбур ҡалаһын (әлеге Орск ҡалаһы) төҙөтмәҫкә, юғиһә, шул арҡала уларға бер ниндәй ирек ҡалмаясағы" хаҡында ҡарар ҡабул итә. Баш күтәреүселәрҙең төп маҡсаты итеп Ырымбур экспедицияһы эшмәкәрлеген туҡтатыу мәсьәләһе ҡуйыла. Экспедиция етәксеһе И.К. Кириловтың ставкаһына Килмәк Нөрөшев һәм уның көрәштәштәренән ике илсе ебәрелә һәм улар башҡорттарҙың экспедиция пландарына ҡаршы бөтөн көскә ҡаршы торасаҡтары хаҡында хәбәр итә һәм был проекттан баш тартыуҙы талап итә. Ләкин илселәрҙең икеһе лә ҡаты һорау алыуҙарға дусар ителә һәм береһе хатта язалауҙы күтәрә алмайынса, шунда йән бирә. Кирилов өҫтәмә көстәрҙең килеүен көтөп тормаҫҡа һәм Орь йылғаһына табан ҡуҙғалырға ҡарар итә. 1736 йылдың 15 июнендә Иван Кирилов Пенза пехота полкы оҙатыуында Чесноковка лагерынан һөжүм башлай. Уның командаһына ҡаршы баш күтәреүселәр ҙур көс туплап, ҡаршы сығырға һәм Орь йылғаһына хәрәкәтте туҡтатырға тейеш була, ләкин был көстәр берләшеп өлгөрмәү сәбәпле, план барып сыҡмай.

Ағиҙелдең һул яҡ бөгөлөндә Кирилов үҙҙәре артынан килгән драгун полкына башҡорттарҙың һөжүм итеүе хаҡында хәбәр ала. 1736 йылдың 1 июлендә Ергән тауы (Башҡортостандың әлеге Мәләүез районы) янында Килмәк Нөрөшев үҙенең отряды менән Өфөнән Ырымбур экспедицияһына ҡушылырға тип ебәрелгән Вологда драгунының биш ротаһы хәрәкәтен туҡтатып, уны ҡыйратыуға өлгәшә. Килмәк Нөрөшев етәкселегендәге башҡорттар иртә менән Вологда драгундары, Өфө дворяндары һәм казактары хәрәкәтен туҡтата. Кириловтың хәбәр итеүенсә, был һуғыш барышында отряд командиры подполковник Чириков, шулай уҡ 18 драгун, экспедицияның 42 хеҙмәткәре - йәмғеһе 60-лап кеше һәләк була. Башҡа хәбәрҙәргә ҡарағанда, был мәғлүмәт ҡорбандар һанының икеләтә, хатта унлата артығыраҡ булыуы хаҡында ла һөйләй (күрәһең, Кирилов тарафынан ҡорбандар һаны кәметеп күрһәтелгән). Шул уҡ йылдың 6 июлендә Кирилов вологодтарға ярҙамға көслө команда ебәрә. Килмәковтың баш күтәреүселәре, ике фронтҡа һуғыша алмау сәбәпле, сигенергә мәжбүр була һәм, шунан файҙаланып, вологодтар Кириловтың төп көстәренә килеп ҡушыла. Иң ҡанлы һуғыштарҙың береһе булған 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт яуы башлығы Килмәк Нөрөшев, Йөрәктау янындағыса, регуляр армияның бер юлы ике көслө берләшмәһенә ҡаршы тора алмай, ләкин башҡорттар Ырымбур экспедицияһының үҙҙәре менән килешелмәгән һәм улар мәнфәғәтенә тап килмәгән ғәмәлдәренә ҡаршы көрәшергә әҙер тороуҙарын һәм көстәрен күрһәтеүгә өлгәшә. Ырымбур проблемаһын хәл итеүҙә аҙыҡ-түлек ылауҙарын кире бороп, партизан һуғышы тактикаһына күсеү ысулы үҙен аҡлай. Ырымбур экспедицияһының һәм гарнизондың аслыҡтан, шуға бәйле сирҙәрҙән һәм өшөүҙән юғалтыуҙары "бөйөк географ" И.К. Кириловтың хәрби һәм етәкселек абруйын ҡаҡшатыуға килтерә.

Килмәк Нөрөшев 1737 йыл башында табын комиссары И. Утятников тарафынан тотолоп, Минзәләгә оҙатыла. 1737-1738 йылдарҙа баш күтәреүсе башҡорттар бер нисә тапҡыр Килмәк абыҙҙы иреккә сығарыуҙы талап итә. В.Н. Татищев Килмәк Нөрөшевтың ғүмерен һаҡларға һәм уны порукаға биреп, Ҡаҙанға йәки башҡа берәй ҡалаға ебәрергә тәҡдим итә. П.И. Рычков мәғлүмәттәре буйынса, Килмәк Нөрөшев Санкт-Петербургҡа һөрөлә. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Юлдаш ЙОСОПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ВЕНГРИЯ БАШҠОРТТАРЫ ХАҠЫНДА

**Башҡорт тарихсылары араһынан тик Зәки Вәлидиҙең китабында ғына Венгрия башҡорттары тарихына ҙур урын бирелгән. Бөйөк ғалимдың "Башҡорттар тарихы" тигән хеҙмәтендә хатта "Мадьярстандағы башҡорттар" тип исемләнгән айырым бүлек тә бар. Шулай уҡ китабының "Башҡорттарҙа Исламиәттең таралыуы", "Монгол дәүерендә башҡорттар" тип аталған бүлектәрендә лә Урта быуаттарҙа Венгрияла йәшәгән башҡорттар хаҡында бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерелә. Гәзит уҡыусылар иғтибарына "Башҡорттар тарихы"ның "Мадьярстандағы башҡорттар", "Монгол дәүерендә башҡорттар" тип исемләнгән бүлектәрен тәҡдим итмәксебеҙ.**



## Мадьярстандағы башҡорттар

Мажгар һәм Башгар атамалары бер-береһенә оҡшағанлыҡтан, улар, X быуат ғәрәптәрендәге кеүек үк, татар-монголдар дәүерендәге авторҙар тарафынан да бутап бирелгән. Быға Дунай мадьярҙары араһында X быуатта ғына түгел, унан һуңыраҡ та бер төркөм башҡорттар йәшәүе сәбәп була. Башҡорттар хатта Исламиәтте ҡабул иткәндән һуң да, төрлө шарттар арҡаһында, Уралдағы ватандарынан айырылып, Мадьярстанға килеп ерләшә. Был хаҡта Әбү Хәмит әл-Андалузи мәғлүмәт бирә. Унының ике әҫәре бар: береһе - "Туһфат әлалбаб" үткән быуаттан бирле мәғлүм, Дорн һәм Фраэн тарафынан тикшерелгән. Уны Габриэль Фернанд 1924 йылда Парижда нәшер итә. "Әл-Муъриб ән баьд-и агаибиьл -Магриб" исемле икенсеһе күптән түгел табылды, һәм уны доктор К. Дублер 1954 йылда Мадридта баҫып сығарҙы, ә 1955 йылда был әҫәр доктор Й. Хрбек тарафынан өйрәнелде. Әҫәрҙең тағы бер нөсхәһе 1957 йылда Американың Принстон университеты китапханаһында табылды. Быныһында Мадьярстандағы башҡорттар хаҡында әүәлге нөсхәһендә булмаған ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Ул Дунай башҡорттарына 1150-1155 йылдар араһында сәйәхәт иткән. Улар мосолман булған, хатта Әбү Хәмиттең Хәмит исемле улы был башҡорт бейҙәренең бер ҡыҙына өйләнгән. Унының әйтеүенә ҡарағанда, гүйә, уларҙың һәр береһе Исфахан йәки Бағдад ҙурлығындағы һәм бай 78 ҡалаһы бар, имеш. Был иҫәпкә мосолмандар менән бергә мосолман булмаған мадьярҙар ҙа ингән булһа кәрәк. Әбү Хәмит Мадьярстан башҡорттары араһында байтаҡ йылдар йәшәй, ике улы башҡорт ҡыҙҙарына өйләнә һәм уларҙан ейәндәре була. Ул 1158 йылда "Гур Керман" тип аталған Киевҡа, унан күрше Волгалағы "Саҡсын" ҡалаһына, унан Хорезм юлы менән Бағдадҡа һәм Һижазға килгән, хаж ҡылған, 1160 йылда Анатолияғы Конья аша ҡабат Мадьярстанға ғаиләһе янына әйләнеп ҡайтҡан. Конья янында ул Дауыт ибн Али исемле бер башҡортто күреп һөйләшкән. Мадьярстандағы мосолман башҡорттар араһында бәғзе заттарҙың Ислам ғилемдәрен өйрәнеү өсөн Халеб ҡалаһы мәҙрәсәһенә килеүҙәрен Яҡут әл-Хамауи ҙа иҫкә ала. Әбү Хәмит төп мадьярҙарҙы ла башҡорт тип таныта һәм королән "башҡорт падишаһы" тип атай. Телдәре төркисә булған башҡорттарҙан Исламиәтте ҡабул итмәгәндәре лә булған һәм улар тәре йөрөтөүселәр походтарында христиан мадьярҙар менән берлектә ҡатнашҡан. Мосолман башҡорттар иһә мадьярҙарҙың мосолмандарға ҡаршы яуҙарына ҡушылмаған, бары тик христиан дошмандар менән булған һуғыштарҙа ғына ҡатнашҡан. Мадьярстандағы мосолман күскенселәр араһында мосолман хорезлылар ҙа булған. Бер-береһенә яҡын булған башҡорт һәм хорезлылар хәнәфи мәҙһәбенә (йүнәлешенә) ҡараған. Киевтағы меңәрләп иҫәпләнгән бәжәнәк (Бечне) төркиҙәр араһында ла Исламиәт таралған. Әммә улар мәғрибтәге остаздарынан өйрәнгән "мәғриби", йәғни "мәлики" мәҙһәбенә ҡараған.

Мысыр авторҙары тәре йөрөтөүселәрҙең Франция короле Луи IX етәкселегендә Тунис һәм Аҡаяға (1269-1270 йылдар) яһаған бөйөк походынан христиан башҡорттарҙың ғәйрәте һәм батырлығы тураһында һөйләй. Ошо хаҡта мәғлүмәт биреүсе Ҡаратай Хазинадар христиан башҡорттарҙың барыһы ла төркисә һөйләшеүен, тәре йөрөтөүселәр араһында иң яуыз һәм уҫал булыуын, үҙҙәренең етди дәүләт тәшкиләте юҡлығын, бай сауҙагәр венециандар ҡаршыһында фәҡир, әммә аяуһыҙ һуғышсанлығы менән танылған милләт булыуҙары арҡаһында, ҡайһы падишаһҡа буйһонһалар, шул падишаһтың еңеү ҡаҙанғанлығын, изге ер өсөн үлемде донъяла йәшәүгә ҡарағанда хәйерле һәм сауаплы күреүҙәрен аңлата.

Луи IX походтарында мадьярҙарҙың ҡатнашлыҡ итеүе Европа мадьяр сығанаҡтарынан да билдәле. Унда иҫкә алынған христиан башҡорттар, мадьярҙар хакимлығы аҫтында булыуға ҡарамаҫтан, төркисәне онотмаған. Башҡорт исеме, ғөмүмән, мадьяр мәғәнәһендә ҡулланылғанлыҡтан, Ҡаратай Хазинадар тарафынан һүҙ алып барылған башҡорттарҙың башҡорт булыуы ла, мадьяр булыуы ла мөмкин. Ибн Сәйет әл-Мәғриби (үлеме 1274 йыл) Дунай көнсығышындағы мадьярҙарҙы Һунғар исеме менән һәм уларҙы башлыса был йылғаның көньяғында ерләшкән мосолман башҡорттар менән ҡәрҙәш ҡәүем тип иҫәпләй. Һунғарҙар пайтәхетенең исемен Тртбуа йәиһә Трбтуа тип атай. Мосолман башҡорттарҙың баш ҡалаһы исеме иһә Крат тип яҙылған, Кран тип уҡырға кәрәктер. Ибн Сәйет билдәләүенсә, уларҙы бер төркмән фәҡихы (дин ғалимы) мосолманлыҡҡа йөгөндөргән. Әбү Ғөбәйҙулла әл-Бәкри Мадьярстанда йәшәгән бәжәнәктәрҙең 12 меңенең һижри буйынса 400-сө, миләди буйынса 1009-1010 йылдарҙа әсир төшкән бер мосолман ғалимы йоғонтоһонда мосолманлыҡ ҡабул итеүҙәре, әммә мәжүси бәжәнәктәрҙең күпселекте тәшкил итеүе, ә был мосолман бәжәнәктәрҙе әл-Хавалис тип атауҙары тураһында һөйләй. Йәғни Мадьярстанда мосолман булғандар яңғыҙ башҡорттар ғына түгел, бәжәнәктәр араһында ла мосолмандар булған. Хавалис һүҙе Хорезм тигәнде аңлатҡанға күрә, бында төп хорезмлыларҙың да йәшәүе мөмкин.

## Монгол дәүерендә башҡорттар

Монгол яуҙары дәүеренә ҡараған Ислам сығанаҡтарында, мадьярҙар ҙа башҡорт исеме аҫтында иҫкә алынып, буталыш барлыҡҡа килгән. Урал башҡорттары монгол хөкөмдарҙарына бик иртә итәғәт иткәндәр. Монголдарҙың "Йәшерен тарих"ына ҡарағанда, Урал башҡорттары Сыңғыҙҙың беренсе баҫып алыу хәрәкәтендә үк, 1207 йылда, Джучи ханға буйһонғандар, һәм был хәл "Телес" исемле бер ҡәүемдең итәғәте рәүешле телгә алына. Шуға күрә башҡорттарҙың монгол хандарына ҡаршы һуғыш алып барыуы хаҡында һүҙ юҡ, уларға үҙ ихтыярҙары менән буйһонғандар, тип уйларға нигеҙ бар. Бату хан заманында һуғыша-һуғыша буйһонған башҡорттар хаҡындағы мәғлүмәттәр Дунай мадъярҙарына ҡарай, тип уйларға кәрәк. Фәҡәт Рәшедеддин тарихында, был авторҙың Европалағы фекерҙәштәренең тырышлығы арҡаһында барлыҡҡа килтерелгән франктар тарихына бағышланған өлөшөндә генә, Мадьярстанда ла татарҙарға ҡаршы һуғышҡан ҡәүемдәр сифатында башҡорттар, мадьяр һәм сасан (йәғни саксондар) айырым-айырым ҡәүемдәр итеп иҫкә алынған һәм ул мәмләкәт Мадьярстан тип аталған. Йәғни Мадьярстанда монголдарға, Бату ханға ҡаршы мадьярҙар менән берлектә Дунайҙағы мосолман башҡорттар ҙа һуғышҡан. XIII быуаттың һуңғы яртыһында мадьяр королдәре, Дунай башҡорттарының диндәрен ҡыҫыу сәйәсәте үткәреп, даими эҙәрлекләүҙәр һөҙөмтәһендә улар христиан мадьярҙарға ҡушылып, тамам юғалғандар.

**Азат ЯРМУЛЛИН әҙерләне.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### V. Бөйөк Башҡорт иле халыҡтары тураһында

XVI- XVIII быуаттарҙа башҡорттар түбәндәге административ-территориаль берәмектәрҙә йәшәгән: Ҡаҙан юлы Өфөнөң көнбайышында һәм төньяҡ-көнбайышында (Минзәлә өйәҙенең көнсығыштағы яртыһы һәм Өфө өйәҙенең көнбайышы) урынлашҡан. Нуғай юлы Өфөнөң көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә (Стәрлетамаҡ өйәҙе һәм Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенең көньяҡ-көнсығыш өлөшө, шулай уҡ Ырымбур, Орск һәм Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең көнбайыш өлөшө) урынлашҡан. Уса юлы - Өфөнән төньяҡҡа тар һыҙатта (Пермь губернаһы Уса өйәҙенең көнбайышы) урынлашҡан. Себер юлы Өфөнөң көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә (Златоуст өйәҙе, шулай уҡ Бөрө һәм Өфө өйәҙҙәренең көнсығышы) урынлашҡан. Алтын Урҙа осоронда Башҡорт иле 4 юлға - Ҡаҙан, Себер, Уса һәм Нуғай юлдарына бүленеп, "даруға" ("наместник") атамаһы монголдарҙан алынған.

Башҡорт ғалимдары башҡорттарҙы этник яҡтан өйрәнеү мәсьәләһенә бик һаҡ ҡарай. Р.Ғ.Кузеев "Башҡорт халҡының килеп сығышы" хеҙмәтендә башҡорттарҙың этник тарихын ике этапҡа бүлеп ҡарай:

Беренсе этап (VIII-IX б.б.): иртә дәүер башҡорттары, ул саҡта уларҙың ата-бабалары төрлө территорияларҙа тағы ла киңерәк этник берәмектәр эсендә йәшәгән. Иң боронғо этник берекмәләргә бөрйәндәр, үҫәргәндәр, тамъяндар, түңгәүерҙәр һ.б. ҡараған. Улар буласаҡ башҡорт этносының төп өлөшө булараҡ, үҙҙәренең икһеҙ-сикһеҙ ерендә йәшәгән, үҙ ырыу атамалары булған.

Икенсе этап (VIII-IX, XIII быуатҡа тиклем): башҡорт үҙаллы үҫеш юлына баҫа, үҙаллы башҡорт тарихы башлана. Башҡорт халҡы көнбайыш Төрөк ҡағанаты (VII б.) тарҡалғандан алып Сыңғыҙхан империяһы (VII б.) барлыҡҡа килгән арауыҡта бер халыҡ булып ойоша.

Башҡорттарҙың халыҡ булып ойошоуын Р.Ғ.Кузеев тәҡдим иткәнсә ике этапта ғына ҡарау етерлек түгел тип иҫәпләйбеҙ. Шуға күрә башҡорт халҡының формалашыуын киңерәк планда, 4 этапта ҡарауҙы тәҡдим итәбеҙ:

Беренсе этап: б.э.т. осор - боронғо башҡорттарҙың ата-бабалары - уғырҙар төрлө территорияларҙа, ҙур этник составта булған. Иң боронғо башҡорт этник берәмектәренә бер нисә ырыу-ҡәбиләләрҙән торған уғыр-бәшәнәктәр, бағыраштар, бөрйәндәр, үҫәргәндәр, тамъяндар, түңгәүерҙәр һ.б. ҡараған. Киләсәктәге башҡорт этносының төп өлөшөн улар тәшкил иткән, улар икһеҙ-сикһеҙ территорияла йәшәгән, үҙ ырыу-ҡәбилә атамаһы булған.

Икенсе этап: б.э. VIII-X быуаттарына тиклем, IV быуатта "Барда" дәүләтселеге, "Тамта" батшалығы кеүек дәүләттәре булған, төрлө территорияларҙа урынлашҡан уғыр халыҡтары 1193 йылда "Башҡорт" дәүләтен барлыҡҡа килтерә.

Өсөнсө этап: VIII-X (X11), XV-XVI б.б. - Башҡорт хандан башлап "Башҡорт иле"ндә ырыу-ҡәбиләләрҙең тупланыуы, дәүләтселектең формалашыуы, "башҡорт" исеме аҫтында тупланған халыҡтың үҙ тарихы башланыуы. Хазар ҡағанаты ҡолатылғандан алып Мәскәү кенәзлегенә тиклем башҡорттар үҙаллы үҫеш осоро кисерә. "Башҡорт" атамаһы алмаған ҡайһы бер уғыр ҡәбиләләре (остяк, вогул һ.б.) уғыр конфедерацияһына ҡарай.

Дүртенсе этап (XV-XVI б.б., XXI быуатҡа тиклем) - башҡорттар һәм төрки телле уғыр ҡәбиләләре ( урта Волга буйының төньяғы, Урал аръяғының төньяғы, көнбайыш Себерҙең төньяғы) Рәсәйгә ҡушылғандан һуң үҙҙәренең ҡәбилә атамаларын үҙгәртә: вогулдар ханттар булып, остяктар - мансылар, яҡуттар булып китә, 1920 йылда ТАССР барлыҡҡа килгәс, күп кенә башҡорттар татарҙар тип яҙыла һ.б.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ул төбәктәрҙә беҙҙең 100 мең самаһы белгестәребеҙ хеҙмәт итә. Улар йәштәребеҙҙең иң эшлекле, иң егәрле өлөшөн тәшкил итә, күбеһе үҙебеҙҙең нефть, авиация университеттарын тамамлаған кешеләр.*

# ҺӘР МИЛЛӘТТЕҢ

## социаль тигеҙлек,

**Башҡортостан Республикаһы Фәндәр, Рәсәй Тәбиғи Фәндәр, Рәсәй Гуманитар Фәндәр академиялары академигы, философия фәндәре докторы, Өфө дәүләт авиация техник университетының философия кафедраһы мөдире, профессор, БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре Фәнил Сәйет улы ФӘЙЗУЛЛИНдың вазифаларын, өлгәшкән уңыштарын, ғилми хеҙмәттәрен һанай башлаһаң, айырым мәҡәлә яҙырға кәрәк булыр ине. Әлегә, ғалим булараҡ, уның төп тикшеренеү йүнәлештәрен генә һанап үтәйек: социаль философия, социология, социаль һәм демографик структура, ижтимағи мөнәсәбәттәр системаһы, этносоциология, ҡала һәм социаль-иҡтисади процестар идаралыҡ социологияһы. Ул 600-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт һәм 50-нән ашыу монография авторы. Фәнил Сәйет улының тағы ла бер күркәм сифаты бар: уның менән барлыҡ темаларға ла әңгәмәләшеп, һөйләшеп була. Ул кешелекте, йәмғиәтте, милләтте борсоған барлыҡ проблемаларға ла битараф түгел, һәр йәһәттән үҙенең аныҡ позицияһы, ғилми концепцияһы бар. Был юлы уның менән әңгәмәбеҙ иҡтисади көрсөк темаһынан башланып китте.**

**Фәнил Сәйет улы, һуңғы йылдарҙа донъяла, бигерәк тә Рәсәйҙәге иҡтисади көрсөк, уның барлыҡҡа килеү сәбәптәре хаҡында бик күп һөйләйҙәр. Әммә был осраҡта барыһы ла тиерлек көрсөктөң сәбәптәрен ситтә йә булмаһа иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең үҙендә күрергә тырыша. Бына һеҙҙең ҡарамаҡҡа нилектән килеп сыҡты бындай күренеш?**

- Мин был хаҡта оҙайлы анализ яһағандан һуң шундай һығымтаға килдем: иҡтисади көрсөктөң нигеҙендә иҡтисад йә баҙар мөнәсәбәттәре генә түгел, ә ижтимағи мөнәсәбәттәр бөрелеше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡиммәттәр системаһы көрсөгө ята. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, ул кеше тәртибен, милләт мәҙәниәтен көйләгән идеалдар, рухиәт көрсөгө. Кеше йә булмаһа айырым социаль төркөм ҡасан да булһа килеп үҙенең ҡылыҡтары өсөн яуап бирергә тейеш, көрсөк был осраҡта кешенең, йәмғиәттең үҙе яһаған хаталары өсөн алған язаһы булып тора. Тап ошо хәҡиҡәтте аңламауыбыҙ арҡаһында беҙ һаман да көрсөктән сыға алмайбыҙ булһа кәрәк.

**Айырым халыҡтар, милләттәр был осраҡта нимә эшләй ала тип уйлайһығыҙ?**

- Көрсөк бөтә халыҡтарҙың да бәләһе булғас, уртаҡ маҡсатта халыҡтар берләшергә, берҙәм идеяһын барлыҡҡа килтерергә бурыслы. Милләттәр бер-береһенән алыҫлашҡан һайын көрсөк тә көсәйә барасаҡ. Бөйөк Ватан һуғышында халыҡтар бер йоҙроҡҡа туплана алыуы һөҙөмтәһендә еңеп сыҡты. Һуғыш мәлендә трагик юғалтыуҙар, емерелеүҙәр кисереүгә ҡарамаҫтан, беҙ Бөйөк Еңеүҙән һуң өс йыл эсендә, 1948 йылда уҡ илебеҙ иҡтисадын 1940 йылғы кимәлгә күтәрә алдыҡ. Статистик мәғлүмәттәргә ҡарағанда, беҙ һуңғы 27 йыл эсендә иҡтисадта үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары кимәленә күтәрелә алғаныбыҙ юҡ. Шуға күрә, хәҙерге стратегик маҡсаттар, үҫеш перспективалары билдәләнгән саҡта был фактор иҫәпкә алынырға тейеш. Тик сеймал һатып ҡына цивилизациялы ил төҙөп булмай. Үҫешкән технология тик юғары интеллект, юғары рухиәт нигеҙендә генә барлыҡҡа килә ала.

**Киң билдәле фильмда бөйөк комбинатор Остап Бендер: "Көнбайыш беҙгә ярҙам итәсәк!" - тип әйтә. Батшаның, ситтән килгән байҙың ярлыларға ярҙам итеүе хаҡында ҡайһы бер халыҡтарҙың фольклор әҫәрҙәрендә лә әйтелә. Беҙ һаман да кемгәлер ышанып, кемдер килеп беҙгә ярҙам итер, тип өмөтләнеп көтөп тик ятабыҙ. Ситтән килгән байҙы беҙҙә заманса инвестор тип атайҙар. Һеҙ инвестициялар ярҙамында ғына иҡтисадты үҫтереп булырына ышанаһығыҙмы?**

- Инвестиция ҡул һуҙып хәйер һорап йөрөүсене лә хәтерләтә. Әлбиттә, инвесторҙың беҙгә ярҙам итеүе ихтимал, әммә ул ғына түгел, беҙгә үҙебеҙҙең социаль, тәбиғи потенциалды үҫтереү һәм файҙаланыу зарури. Беҙҙең стратегия тап ошо факторҙар нигеҙендә ҡоролорға тейеш. Башҡортостандың юғары техник белемле, талантлы һәм егәрле йәштәре үҙебеҙҙә эш таба алмайынса, башҡа төбәктәргә китә. Илебеҙҙең барлыҡ газ, нефть табыу тармаҡтарында эшләүсе төп көстө улар тәшкил итә. Ул төбәктәрҙә беҙҙең 100 мең самаһы белгестәребеҙ хеҙмәт итә. Улар йәштәребеҙҙең иң эшлекле, иң егәрле өлөшөн тәшкил итә, күбеһе үҙебеҙҙең нефть, авиация университеттарын тамамлаған кешеләр.

**Ҡайһы ерҙә хеҙмәт урыны, эш бар, шунда тормош алға бара. Был - аксиома. Хәҙерге ваҡытта эшһеҙлек арҡаһында иң беренсе нәүбәттә ауылдарыбыҙ ыҙа сигә. Ауыл хужалығын үҫтереүҙең ниндәй перспективаларын күрәһегеҙ? Күптәр, мәҫәлән, ауылда йәшәүселәр ҡалаға күсеп килергә тейеш, тип иҫәпләй. Мин бындай тәҡдим менән тулыһынса ризалашмайым. Сөнки ауыл - ул халыҡтың, милләттең тел, рух мөхитен барлыҡҡа килтереүсе урын бит.**

- Беҙҙең халыҡтың 70 процент самаһы ауылда йәшәй икән, ауыл хужалығын үҫтереү милләтебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү проблемаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. "Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй" тигән һымаҡ, ундабында берәм-һәрәм генә эшмәкәрлек иткән фермерҙарға таянып ҡына ауылды һаҡлап ҡалып булмаясаҡ. Донъяның юғары цивилизациялы илдәрендәге һымаҡ, эре агросәнәғәт комплекстары төҙөп кенә быға өлгәшергә мөмкин. Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда ер бер ваҡытта ла шәхси милек булып һаналмаған. Был хатта илебеҙ тәбиғәтенең, һауа торошоноң тотороҡло булмауы менән бәйле. Шартлы рәүештә алғанда, ауылдың ике яғында ике көтөүлөк бар икән, ти. Шул уҡ ауылдың бер яғында бер йылда ямғыр яуһа, икенсе яғында ҡоролоҡ күҙәтелһә, ауыл көтөүе үлән үҫкән яғында йөрөй ала. Был осраҡта көтөүлектәр шәхси милек иҫәпләнһә, көтөү юҡҡа сығырға тейеш була. Хәҙерге ваҡытта тырышып-тырышып ерҙәрҙе һатыуҙың нимәгә алып килере көн кеүек асыҡ.

**Йәштәрҙең күпләп ауылдарҙан ҡалаларға, сит өлкәләргә, сит илдәргә китеүе хәҙер нормаға әүерелде. Ауылдар йылдам рәүештә бәләкәйләнә, мәктәптәр ябыла, ғаиләләр тарҡала, ситкә китеүсе ғаиләләрҙәге балалар башҡа тел, башҡа рухиәт, башҡа мәҙәниәт мөхитенә барып эләгә һ.б.**

- Был йәһәттән бер генә миҫал килтереп үткем килә. Мин йәш саҡта Мәскәүҙә аспирантурала уҡығанда Вильнюстан килтерелгән колбаса алып ҡайта торғайным. Бик тәмле, туҡлыҡлы ине улар. Күптән түгел бер конференцияла Литва ғалимдары менән осрашырға тура килде. Улар күҙ йәштәрен сығарып, үҙ хәлдәре хаҡында һөйләне. Улар хәҙер үҙҙәрен-үҙҙәре туҡландыра алмай, сөнки бөгөн бер нисә генә агросәнәғәт комплексы тороп ҡалған. Улар хатта һөт менән картуфты Беларустан барып һатып ала икән. Иҡтисадтары емерелеүенең төп сәбәбе - бер миллиондан ашыу йәштәренең сит илдәргә китеп бөтөүендә. Уларҙың фекеренсә, был йәштәр Литваға мәңге әйләнеп ҡайтмаясаҡ.

**Йәштәрҙең күпләп ситкә китеүе киләсәктә милли кадрҙар мәсьәләһен хәл итеүҙә лә ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ. Шулай түгелме? Беҙҙә, мәҫәлән, шундай тенденция ла күҙәтелә: беҙҙекеләр күпләп ситкә китә, уларҙың урынын ситтән килеүселәр яулай. Ҡайһы ваҡыт шулай уйларға ла тура килә: беҙҙең тик батырлыҡҡа ғына хоҡуғыбыҙ бармы ни?**

- Был мәсьәләгә тарихи яҡтан ҡарау ҙа мөһим. Рәсәй тип аталған оло ватаныбыҙҙы һаҡлауҙа оло ҡаһарманлыҡ күрһәткән башҡорттар. Башҡорт батырҙарының нимәгә һәләтле булыуын хатта Наполеон да белгән һәм әлегәсә һаҡланып ҡалған яҙмалар буйынса ул Рәсәй батшалығына яугир башҡорттарҙы төрөктәр менән бәйле проблемаларын хәл итеүҙә файҙаланырға тәҡдим иткән. Башҡорт кавалерия дивизияһында 78 Советтар Союзы Геройы барлығын, башҡа хәрби подразделениеларҙа шунсама геройҙарҙың булмағанлығы хаҡында хәҙерге башҡорттарҙың барыһы ла беләме? Белгән хәлдә лә, бының менән ғорурланамы? Рәсәйҙәге аҙ һанлы халыҡтар араһынан ҡайһы халыҡ шул уҡ Наполеонға ҡаршы 28 полк төҙөп ҡаршы бара алған?

Дөрөҫ әйтәһең, Әхмәр, батырлыҡҡа хоҡуғыбыҙ булған һымаҡ, үҙ милли кадрҙарыбыҙҙы үҫтереүгә лә хоҡуғыбыҙ бар. Беҙҙең бына тигән егет-ҡыҙҙарыбыҙ сит ерҙәрҙә, сит илдәрҙә йөрөй. Шул уҡ ваҡытта республикабыҙ үҫешендә улар ҙур роль уйнай алыр ине. Ун йыл элегерәк миңә Алыҫ Көнсығышта булырға тура килде. Шунда эре алтын табыу предприятиеһында эшләүсе ҡайһы бер етәкселәр менән осраштым. Улар араһында Баймаҡтан сыҡҡан бер башҡорт егете: "Мин үҙебеҙҙең яҡта йүнле эш таба алманым. Хәҙер бында ҙур предприятие етәксеһе булып торам", - тип һөйләне. Беҙ ана шундай егәрле егеттәребеҙҙе үҙебеҙҙең республика мәнфәғәтенә егеп эшләтә алырлыҡ мөмкинлектәр тыуҙырырға бурыслыбыҙ.

**Һеҙҙең иң башта иҡтисади көрсөктөң сәбәптәренә бәйле килтергән дәлилдәрегеҙҙән сығып, шундай һығымта яһарға мөмкинме: һәр бер милләттең йола-традициялары уның социаль мәсьәләләрен хәл итеүгә булышлыҡ итә**



***ФӘНИЛ ФӘЙЗУЛЛИН:***

*Батырлыҡҡа хоҡуғыбыҙ булған һымаҡ, үҙ милли кадрҙарыбыҙҙы үҫтереүгә лә хоҡуғыбыҙ бар. Беҙҙең бына тигән егет-ҡыҙҙарыбыҙ сит ерҙәрҙә, сит илдәрҙә йөрөй. Шул уҡ ваҡытта республикабыҙ үҫешендә улар ҙур роль уйнай алыр ине.*

✔ *Башҡорттар урыҫтар менән бергә Рәсәй Федерацияһының нигеҙ таштарын һалған халыҡ. Иван Грозный ваҡытында ла башҡорттар Рәсәй менән килешеү төҙөгән. Автономияны беҙ Октябрь революцияһына тиклем үк төҙөгәнбеҙ.*



**икән, һәр халыҡтың, һәр милләттең үҙендә йәшәй социаль ғәҙеллек. Миҫалға Чечен Республикаһын алайыҡ. Унда милли һәм дини традициялар һаҡланыуы һөҙөмтәһендә балалар һәм ҡарттар йорттары юҡ. Был фекергә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Беҙ, ғөмүмән, һуңғы ваҡытта йола-традициялар тураһында һөйләшмәйбеҙ ҙә һымаҡ. Хәҙер хатта киң матбуғат сараларында тәрбиә хаҡында мәҡәләләр табып булмай. Малаховтың "Һөйләһендәр, әйҙә!" шоу программаһы кешенең етешһеҙ яҡтарын, негативты күрһәтеүгә, өйҙәрҙән, ғаиләләрҙән сүп-сарҙы ситкә сығарыуға ҡоролған. Сит илдәрҙә булған саҡта ла шуға иғтибар иттем: ул программалар ситтә иң популяр булып иҫәпләнә, йәғни бөгөн донъя тамашасыһы нәҡ шул тапшырыуҙар аша Рәсәйҙәге тормош хаҡында фекер йөрөтә.

Минең аспиранттарым балалар йорттары һәм патронат ғаиләләр хаҡында ғилми хеҙмәт яҙҙы. Үкенескә күрә, патронат ғаиләләр араһында йәшәү шарттары һәм интеллектуаль кимәле килгәндә яңылышмаҫ өсөн тарихи факторға таянырға, атайолатайҙарың тарафынан һыналған юлды һайлау иң дөрөҫөләр. Зәйнулла ишан Рәсүлев эшмәкәрлегенә бәйле йөҙ йыл элек булып үткән ваҡиғалар шул хаҡта һөйләй: беҙҙең атай-олатайҙар дини һәм милли йолатрадициялар берлегендә генә яңылыш аҙымдар яһауҙан ҡотола алған.

**"Рәсәй милләте" тигән идеяға ҡарашығыҙ нисек?**

- Был ҙур сәйәси хата. Рәсәй Америка Ҡушма Штаттары түгел. Америка халҡы ҡаҙанда ҡайнатылған "ассортины" тәшкил итһә, Рәсәйҙәге халыҡтарҙың һәр береһе үҙенең тыуған ерендә, тарихи ватанында йәшәй. Тап ошонан сығып, Рәсәйҙең сәйәсәте ҡоролорға тейеш. Беҙҙең закондар Рәсәйҙә йәшәгән милләттәр араһындағы мөнәсәбәтте көйләүгә ҡоролһа ғына, идеаль йәмғиәт килеп сығасаҡ. Минеңсә, "Рәсәй милләте" тигән һүҙбәйләнеш ул граждандыҡты билдәләй торған төшөнсә. Милләт төшөнсәһе иһә этнос үҫешенең иң юғары баҫҡысы. Был - закон, ә закон үтәлһә генә ул закон була ала. Әгәр ҙә инде уны тормошҡа ашырыу кешенең теләгенә генә ҡоролһа, был урында анархия башлана. Беҙҙә иһә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеү инглиз телен өйрәнеүгә ҡарағанда хөрмәтһеҙ ҡуйылған. Беҙҙә Бангладештан бер аспирант уҡый. Ул минең менән башҡортса һин дә мин һөйләшә. Ул үҙенең тыуған телен, инглиз, француз, урыҫ, башҡорт телдәрен белә. Төп халыҡтың телен белеү бер кешене лә кәмһетмәй, уның ошо халыҡ алдында абруйын ғына күтәрә. Минен урыҫ дуҫтарым араһында башҡортса һөйләшкәндәр бик күп.

**Быйыл Октябрь инҡилабына 100 йыл тула, ике йылдан республикабыҙ үҙенең 100 йыллығын билдәләйәсәк. Ошо ике ваҡиғанан сығып, быуатлыҡ үткәнебеҙгә үҙ баһабыҙҙы бирергә лә тейешбеҙ. Октябрь инҡилабы беҙгә нимә бирҙе, уның ыңғай һәм кире яҡтары нимәгә ҡайтып ҡала, тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Социалистик ҡоролош Ҡөрьәндә, Библияла яҙылған принциптарҙы тормошҡа ашырыу ҙа булып тора. Әйтәйек, азатлыҡ, тигеҙлек, ғәҙеллек, изгелек принциптары диндә лә, социалистик идеологияла ла бар. Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡи принциптарының ҡайһыһы насар ине һуң? Беҙ нинә шуны онотабыҙ?

**Философияла "Берҙәмлек һәм дәғүәләшеү законы" бар. Хәҙерге заман башҡорто һәр яҡтан да алға киткән башҡалар кеүек йәшәү шарттары тыуҙырып йәшәйем, тиһә, ниндәйҙер кимәлдә халҡының әхлаҡи принциптарына ҡаршы килергә тейеш булып сыға. Сөнки, билдәле булыуынса, хәҙерге ваҡытта ғәҙел юл менән бай булыу мөмкин түгел. Бында шундай дилемма килеп сыға: тик тарихи принциптарға таянып, әхлаҡи яҡтан таҙа йәшәп тә булмай, шул уҡ ваҡытта замандан артта ҡалып та булмай. Бында алтын урталыҡ табып буламы?**

- Нишләп булмаһын ти, табырға була. Миҫалға Японияны ғына алайыҡ. Был илдең донъя кимәлендәге ниндәй уңыштары булһа, уларҙың барыһы ла японлдарҙың милли һыҙатына ҡулайлаштырылған. Шул уҡ ваҡытта Японияла ла, Ҡытайҙа ла халыҡ традициялар нигеҙендә йәшәй. Улар интернациональ традициялар менән үҙҙәренең милли традицияларының органик берҙәмлеген, синтезын табыуға өлгәшкән. Беҙ иһә Европаға һәм көнбайышҡа ҡарап йәшәп, үҙебеҙҙең көнсығыш традицияларыбыҙҙы юғалтабыҙ. Бер саҡ Японияға барып иҫтәрем китеп ҡайттым. Уларҙа шулай: әгәр ҙә һинең балаң һин төҙөгән фирмала эшләмәһә, был японлар өсөн милли трагедияға тиң ваҡиға.

**Ғәзит уҡыусының философия фәндәре докторы, профессор Фәнил Сәйет улы Фәйзуллиндың иң тығыҙ эш көнө нисек үткәнен белгеһе килләр.**

- Етенсе яртыла торам. Ашап алғас, һигеҙенсе яртыға фитнес клубҡа барып инәм. Был клубта аҙнаһына өс тапҡыр булам. Клубта тренажер залында шөғөлләнәм, бассейнда йөҙәм, саунала булам, душта ҡойонам. Шунан сәғәт туғыҙҙар тирәһенә эшкә барып етәм. Күберәк докторанттар, аспиранттар менән эшләйем. Үҙ ғүмеремдә барлығы 150-ләп фән кандидаты, 30-лаған профессор, докторҙар әҙерләнем. Көн һайын тиерлек Башҡортостан Фәндәр академияһына барырға тура килә. Академияла фән работниктары, ғалимдар менән осрашам, төрлө программалар өҫтөндә эшләйбеҙ. Рәсәй гуманитар фонды эксперты булараҡ та эш алып барырға тура килә. Ғилми советта ҡатнашам. Философия, социология фәндәре буйынса диссертация советтары ағзаһы булып торғас, унда ла ҡатнашам. Советҡа килгән һәр бер диссертация эше менән танышып сығып, үҙендең фекереңде тыуҙырырға кәрәк. Ул хеҙмәттәргә рецензиялар яҙырға ла ваҡыт табаһың. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән дә диссертация хеҙмәттәре килә. Улар менән дә танышып, эш итергә кәрәк. Йыл буйына күп һандағы ғилми конференцияларҙа ҡатнашам. Шуға күрә уларҙа сығыш яһар өсөн мәҡәлә яҙып өлгөрергә лә кәрәк. Бер нисә журналдың редколлегия ағзаһы булып торам. Унда ла мәҡәләләр уҡып, фекерендә яҙып биреү күп ваҡытымды ала.

Эштән ҡайтҡас, телевизорҙан юҡ-бар детективтар ҡарамайым. Сөнки минең зауыҡым классик әҙәбиәт нигеҙендә формалашҡан. Уҙған йыл ғилми конференциянан һуң Рәсәй Яҙыусылар союзында үткән түңәрәк өҫтәлгә саҡырҙылар. Унда ҡатнашыусылар бер-береһен ныҡ маҡтағас, ҡулымды күтәреп: "Минең китап кәштәһенең иң өҫкө өлөшөндә өс китап: Толстойҙың "Һуғыш һәм солох"о, Горькийҙың "Клим Самгиндың тормошо", Шолоховтың "Тымыҡ Доны" тора. Шунда дүртенсе китапты ҡуйырға ине. Кемде тәҡдим итәһегеҙ?" - тип һораным. Тик улар дүртенсе китапты атай алманы.

# ЙОЛА-ТРАДИЦИЯЛАРЫНДА...

## социализм йәшәй

юғары булғандары бик аҙ. Күп ғаиләләр үҙҙәренең социаль-иҡтисади хәлен яҡшыртыу маҡсатында күпләп балалар ала. Улар араһында изге теләк менән унар бала алғандары ла күп.

**Шул уҡ ваҡытта милли йола-традициялар дини йола-традициялар менән дә тығыҙ бәйле. Әммә һуңғы ваҡытта йәштәрҙең күпләп дингә килеүе тағы ла бер проблеманы барлыҡҡа килтерҙе: ул да булһа, йәштәрҙең төрлө сектаңлар йоғонтоһона бирелеүе.**

- Минеңсә, Ислам дине башҡа диндәргә ҡарағанда милли традициялар менән нығыраҡ бәйләнгән. Әйтәйек, Тажикстанға, Үзбәкстанға ҡарағанда Башҡортостанда дини традициялар милли традициялар менән нығыраҡ бәйле, хатта уларҙың органик бәйлелеге һәм үҫеше күҙәтелә. Беҙ диндең кешеләр араһында социаль тигеҙлек булдыра торған яҡтарын күберәк үҫтерергә тейешбеҙ. Күптән түгел бер конференцияла ошо проблемалар буйынса шөғөлләнгән фән эшмәкәре бик ҡыҙыҡлы сығыш яһаны. Бәктиһән, ИГИЛ-да йөрөүселәрҙең 90 проценты намаҙ уҡыуҙың нимә икәнен дә белмәй икән. Кеше үлтереү традицияһы Ҡөрьәндә юҡ икән, ИГИЛ-дың Ислам менән бәйләнеше лә юҡ. Беҙҙә хатта йыһат һүҙен дә дөрөҫ тәржемә итмәйҙәр. Йыһат - ул бер халыҡты икенсе халыҡҡа ҡаршы һуғышҡа әйҙәү түгел, ә кешенең үҙ етешһеҙлектәренән баш тартыуын, шуларҙан ҡотолорға йүнәлтелгән хәрәкәтте аңлата. Ислам тыныс йәшәүгә саҡыра торған дин. Минеңсә, дини юлға сын тәшкил итә. Мостай Кәрим "Рус түгелмен, ләкин российянмын" тип милләт менән граждандыҡ төшөнсәләренә анығлыҡ индереп китте бит инде. Был шиғыр юлдарында ул бер үк ваҡытта үҙенең рус милләтенән түгеллеген, шул уҡ ваҡытта Рәсәй гражданы булыуын таный. Совет осоронда уҡ кесе улым "Правда" гәзитен иҙәнгә йәйеп ебәреп, ундағы Политбюро ағзаларының фотоларына күрһәтеп: "Атай, нинә былар араһында башҡорттар юҡ ул?"- тип һорағайны. Хатта ул саҡта Коммунистар партияһы барлыҡ проблемаларҙың хәл ителешен ныҡлы контроль аҫтында тотҡан саҡта ла ошо хәлдәргә юл ҡуйылған икән, хәҙерге заманға ҡарата ни әйтәһең инде? Беҙгә хәҙер интернационализм төшөнсәһен һүҙлегебеҙгә кире ҡайтарырға кәрәк. Хатта Рәсәй батшалығында был факторға иғтибар булған. Беҙгә губернатор итеп ебәрелгән кешеләр урындағы халыҡтың тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, телен өйрәнергә, белергә тейеш булған. Беҙ тарихыбыҙҙың күп кенә мәғлүмәттәрен тап губернаторҙар яҙмалары буйынса өйрәнәбеҙ. Республикаларҙа эшләүсе төрлө кимәлдәге етәкселәр ике дәүләт телен дә белергә бурыслы. Ә беҙҙә күберәк урыҫ теле менән инглиз телен беләләр. Беҙҙә һуңғы йылдарҙа Рәсәй, донъя кимәлендәге форумдар, конференциялар үтеп тора. Уларҙа һис юғы башҡортса синхрон тәржемәләр булырға тейеш. Бындай тәржемәләр беҙҙең театрҙарҙа ғына эшләй. Башҡортостанда дәүләт теле икәү икән, икеһе лә мәктәптәрҙә уҡытылырға тейеш.

- Был инҡилабтың кире яҡтары хаҡында күп һөйләнелде, күп яҙылды, мин ыңғай яҡтарына туҡталам. Илебеҙ иҡтисады, уның халҡы шундай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә юғары уңыштарға өлгәшә алыр инеме? Беҙ шул нисә йыл эсендә иң цивилизациялы илдәрҙең береһенә әүерелдек. Быны инде Бөйөк Ватан һуғышы күрһәтте. Илебеҙҙең иҡтисади яҡтан үҫеше халыҡтарҙың берләшеүенә килтерҙе. Әлбиттә, хаталарыбыҙ ҙа күп булды, әммә улар күберәк инҡилабта ҡатнашыусыларҙың субъектив хаталары менән бәйле.

**Шул уҡ ваҡытта Октябрь революцияһы емерелеүгә дусар булған Рәсәй империяһының федерацияға әйләнеүенә булышлыҡ итте.**

- Башҡорттар урыҫтар менән бергә Рәсәй Федерацияһының нигеҙ таштарын һалған халыҡ. Иван Грозный ваҡытында ла башҡорттар Рәсәй батшалығы менән килешеү төҙөгән. Әйтергә кәрәк, федерацияға нигеҙ шул саҡта уҡ һалына. Автономияны беҙ Октябрь революцияһына тиклем үк төҙөгәнбеҙ.

**Октябрь революцияһы социализм төҙөнө. Шул уҡ социализм, алда әйткәнебеҙсә, милләттәрҙең йәшәү принциптарында бар ине. Әле йөҙ йыл үтеп, социалистик ҡоролош емерелгәс, беҙ революцияға тиклемге йылдарға кире әйләнеп ҡайттыҡ. Шулай булғас, Октябрь революцияһы кәрәк инеме икән?**

**Йәш күренеүегеҙҙең сере нимәлә?**

- Был беҙҙең тоҡомдан килә. Минең атай 89 йәшкә етте. Ул мәктәп директоры булып эшләне, тарихтан уҡытты. Әсәйем әҙерәк йәшәне, ул да уҡытыусы ине. Мин ататтар араһында үҫтем. Ике өләсәйем дә 91 йәшкә етеп үлде. Атайым үлер алдынан: "Беҙҙең генотипты һаҡлағыҙ", - тине.

**"Киске Өфө"гәзите уҡыусыларына ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

-"Киске Өфө"нө рухлы кешеләр уҡый. Унда сығыш яһаусы журналистар, авторҙар һәр ваҡыт ниндәйҙер яңы фекер әйтергә, уҡыусының рухын күтәрергә, уны позитивҡа көйләргә тырыша. Шундай фекерле кешеләребеҙ бар саҡта киләсәгебеҙҙең өмөтлө икәненә ышаныһың арта. Рухы бай кешеләр менән аралашыу кешенең рухын күтәрә, уның патриотик хистәрен уята. Милләтебеҙҙең ошондай баҫмаһы булыуы ла бик күп нәмә тураһында һөйләй. Күп кенә республикалар бындай баҫмаһы менән маҡтана алмай...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Яҙҙың ошо йәмле көндәрендә академик Фәнил Сәйет улы Фәйзуллин үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләй. Милләтебеҙҙең аҡһаҡалы йәшенә еткән, шаҡтай йәш күренгән философҡа нимә теләргә ҡала инде: беҙҙе ҡыуандырып оҙаҡ йәшәгеҙ, Фәнил Сәйет улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

Хәтирә әсәһе йәнәшенә - бүрәнә осона терәлеп, әйтер, йыуатыр һүҙ тапмаҫтан, тынып ҡалды. Быуаһы йырылған Сәгиҙә һаман буҙлай-һамаҡлай яттан әрләп, күңелен бушатты:

- Дастуйный ирҙәр һуғышып ятҡанда, был ней, күтә ҡортлаған нәмә, бисәләр күҙләгән инде! Йәлсемәгер! Бүре йыҡҡыр, әҙәм ишетмәгәндә ҡыланып - ҡатын айырып! Бисәнән бисәнең артығы бар тей микән, нишана! Һуғышҡа ебәреп, кәрен ҡайтартыр кәрәк...

Шул ваҡыт был тамашаны ҡапыл туктатҡан бер хәл булды - солан ишеге эстән дарһылдата төртөп асылды ла, тотҡа-йоҙаҡтары зыңҡылдап таҡта ҡоймаһына бәрелде. Ишек ауыҙында таяғына таянып, һөҙөргә әҙерләнгән үгеҙ ише аҫтан ҡарап Саҙрытдин ҡарт тора ине. Быны ул туҡылдап алға ынтылған таяғы артынан калушлы аяҡтарын шылдыра-шылдыра һикәлтәнән төшә башланы. Бабайының холҡон белгән Сәгиҙә тиҙ генә аунап ятҡан биҙрәһен эләктерә һалып, танауын мышҡылдата-мышҡылдата һыйырҙарына йүнәлде, Хәтирә иһә атаһына ҡаршы атланы.

- Атай... нихәл?

Бабай ҡыҙын күрмәгәндәй булып үтеп китеп, әле генә ҡатындар буҙлашҡан бүрәнәгә терәлде лә, таяғын ҡолатып һалғас, ауыр ҡарашын күтәрҙе:

- Шәппеҙ.

Тынып ҡалдылар. Хәтирә атаһы алдында ни тип аҡланырға белмәне. Ғәйепләйме икән Саҙрытдин ҡыҙын, әллә башҡамы уның фекере?

- Ништәйең, күсеп ҡайтаңмы?
- Юҡ.
- Ҡалайтаң?
- Мин, атай, Биләриткә эшкә сыҡмаҡсымын.
- Ҡасан?
- Бөгөн ял итәм дә, дүшәмбенән ғариза яҙам.
- Һе.

Аҙаҡ, өсәүләшеп сәй эскәндә лә, ҡаралтыларын сығарып әләп, һыпырып донъя таҙалап сығып, киске ихата сиҙемендә тукмас ашағанда ла, ҡарт был һөйләшеүгә әйләнеп ҡайтманы. Бары икенсе көн һары таңдан ҡыҙын алып барып ҡуйып, ҡайтырға тип арбаһына кире менеп ултырғас ҡына, көрһөнә биреп:

- Дә-ә, йыйын урыҫ араһында еңел булмаҫ... - тип ҡуйҙы.

Хәтирә бары кисә генә атаһының ауыр ҡараштары аҫтында башына килеп әйтеп өлгөргән хәбәренән кире ҡайта алмай ине инде:

- Урыҫ та кеше инде, ашамаҫтар әле.
- Айыуҙан ҡурҡма, кешенән ҡурҡ, тигәндәй, әҙәм башын әҙәм ашай торған көндәр... Аңғарып йөрө һин анда.

Атаһы артынан ҡарап тороп ҡалды ҡыҙы. Ҡартайып, бәләкәсәйеп ҡалған икән. Әллә дөрөҫ әйткән - ҡартайған атаһы.

### Төрөмшик

Атаһының знакумына көн һарҡыуға ғына килеп инде Хәтирә. Ауылдан һөт алып сыҡҡан алама машина юлда ҡырҡ боҙолоп, Ҡағыға саҡ килеп етһә, һөт фләктәре араһында ҡыҫылышып килгәндәр ҡара санға батты. Унан ҡалаға тиклем атына ла, машинаһына ла әләгеп-һарҡып килеп төшөп ҡалды. Знакум тигәндәре башҡорт ул, Һатыбал ағай. Уны нинә "знакум" тигән булалыр инде атаһы, урыҫ шикелле итеп. Ҡатыны ла үҙҙәренең яғынан - Файза еңгә.

Һатыбал ағай ҙа ҡала урыҫтарынан күрмәксе, бәйгә ҡуйып ажғыр эт тота. Унһыны хужанан башҡаны ҡан дошманы күреп, һеләгәйҙәрен ағыҙып ябырыла ла ҡуя. Бәйе генә тота харшаҡты, ысҡынып китһә, ашамаҫ тимә. Быны белгән Хәтирә күн сумкаһы төбөнә мөнйөлгән тауыҡ һөйәктәрен гәзиткә төрөп һалып алған инде. Юлға сығыр алдынан уҡ күҙаллаған ул быны. Әле ҡапҡанан ингәс тә татлы еҫен юғалтып өлгөрмәгән һөйәктәрҙе сабырһыҙланып оянан килеп сыҡҡан маһмай алдына ырғытты. Ят әҙәмдә күреүҙән уҡ күҙе аларып өлгөргән януарҙың асыуы һыпырылып төштө лә ҡуйҙы. Аҙау тештәре араһында һөйәктәр сатыр-сотор итеп кенә ҡалды ла, теге ҙур ялбыр башын әле был, әле икенсе яҡҡа ҡыйшайтып, ымһынған бала ҡарашы менән әле генә өҙгөләп ташларға ыктаплағанының бер битенә, бер ҡулдарына төбәлде. "Йә, тағы нимәң бар?" ти ине мөхлүктең теремек күҙҙәре. Ошондай дәү ялбыр ғифриттың бер ҡатлылығынан көлөп ебәрҙе Хәтирә. Инде лә зыян итмәсен аңлап яҡын уҡ килеп ҡулын һуҙҙы. Эт баяғы тәмле һөйәк еҫе килгән ҡулды ялп-йолп иттереп ялап та ебәрҙе. Ҡатын уның йөнтәҫ маңлайынан һөйҙө лә, муйынын ҡыҫҡан ҡайыш аҫтын ыуаланы. Тамам ирене маһмай, башын үргә сөйөп уҡ ирәйеп китте. Шул мәл өйҙән сыҡҡан берәү быларҙың рәхәтләнеп булде. Файза еңгә икән. Оло ҡатын солан ишеген йоҙаҡлап әйләнеп баҫты ла, эт эргәһендәге кешене күреп, тертләп китте:

-Ай, әттәгенәһе! Кем икән тиһәм...
- Файза апай, мин был, Саҙрытдин ҡарттың...
- Таныйым! Әллә танымай тора тейенме! - Хужабикә йоҙаҡтарын кире асып, солан ишеген эскә төртөп ебәрҙе. - Эт менән торғасың ғына ҡурҡтым ҡапыл. Ялбыр ней беҙҙең, ят кешене яҡын да ебәрмәй бит ул, шундуҡ таныш бирә торғайны. Әйҙә, ин!

Ике ҡатын эскә үтте. Файза ҡыҫҡырып һөйләй-һөйләй, алдан атланы. Әллә нишләп шулдап һөйләшә ошо апай, ҡолаҡҡа ҡаты тиһәң, ишетә кеүек.

-Төнгә китергә сығып барам! Аҫтағы Сашаға әләгеп китәм! Сәрмән диттумында төнгә нәне булып йөрөйөм! Ағаң алынғас сыҡтым, тамаҡ аҫрар хәл кәрәк.

- Һатыбал ағайҙы ла алдылармы ни? Оло ла инде...
- Алдылар! Алмай... унан олораҡтар ҙа китеп бөтөп бара. Тора-бара сәпсим бисә-сәсә лә, бала-саға ғына ҡалып бөтөрбөҙ байыы. - Ҡаҙан ситендә ҡырын төшөп ятҡан самауырын һынар ҡолаҡсаһынан һөйрәп алып, усаҡ алдына ҡуйҙы ла, ялп итеп ҡунағына ҡарап алды. - Һинеке лә шундалыр?

Быңдай һорауҙы көтмәгән Хәтирә ҡыҙарып китте. Ул быға саҡлы ла иренең һуғышҡа алынмағанынан оялып йөшәне, барыһы ла сәбәбен белеп торһа ла, үҙен кәм итеп тоя, йәшерен генә ғәрләнә ине. Әле килеп унда бер эше лә юҡ та кеүек, әммә барыбер оят ине.

-Юҡ... Ул брондә.
- Ә-ә... - хужабикәнең ҡарашында ниндәйҙер ышанмаусанлыҡ билгеһеме, әллә минә барыбер, былай ғына һорайым, тигән төшөнсәме сағылып ҡалды. Шулай ҙа ул был хаҡта һүҙ ҡуйыртманы. - Мына, самауыр ҡуйып! Анау йәшниктә икмәк менән шәкәр бар! Мин сыға һалайым, атыу ҡорогор урыҫ көтмәй китеп барыр!

Ҡабаланып, ишеккә ыңғайлаған ҡатын ҡунағының соланда ултырып ҡалған оло төйөнсәгенә иғтибар иткәс, ҡайырылып өндәште:

- Ҡуна ҡаландыр бит?

Хәтирә тағы албырғаны:

- Файза апай, мин... эш эҙләп килдем.
- Аһ! Ал нисек һине алайтып сығарып ебәрҙеләр? Ирең...
- Ирем менән түгел мин, бер үҙем генә.

Ҡатындың ишеткәненән бер генә һирпелеп ҡарап алды ла, сығыуға ынтылды:

-Ярай, иртән һөйләшербеҙ!

Хужабикә артынан ишек ябылғас та самауырға тотонорға ынтылманы Хәтирә. Хәле сәй эсерлек түгел. Эсе бошто. Ят ҡаланан, ят донъянан, ят йорттан ятһыраны. Кемдәрҙер күҙәтеп торғандағылай, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй ыуаланды. Тәҙрәләр араһында урамдан үткән-һүткәндәрҙе күҙәтеп йөрөп, ҡараңғыны ҡуйыртты. Инде тыш күренмәй башлағас, ут тоҡандырып тормай ғына, апай күрһәтеп киткән урынға ятты. Унда ла күҙе өйрәнгән ҡаралыҡҡа төбәлеп, йә уйларға, йә буҙларға белмәй шаңҡып ҡалды.




* * *

Ҡояш төшлөккә күтәрелгәс кенә ҡайтып ингән Файза апай бер аҙ серем итеп алғас, сәй эстеләр ҙә картуф утарға сыҡтылар. Быгаса йәй башында уҡ утарып күмелгән булһа ла, дымлы урман тупрағында ҡый сәскән ише күпереп ҡалҡып килә. Йолҡоуға ла йомшаҡ былай, көсәнмәй генә услап алып өйә барҙылар. Хәтирәнең һөйләгәндәрен ҡолаҡ ситенән үткәреп, үҙ башындағы хәсрәттәре эсендә йөрөүен аңғарған Файза, бил яҙмаҡ булып тороп баҫты:

- Эш ней хәҙер күп инде... Ниндәйерәген ҡарамаҡсыһың?

Хәтирә лә башын ҡалҡытты:

- Ҡалайы ла барыр ине.
- Шуға уйлап йөрөйөм әле, һин йәш кеше, үткенһең, сосһоң, беҙҙең диттумда, ана, прамтауар кәрәк тейҙәр. Элеккеһе ир ине, һуғышҡа китте.

Хәтирә бер аҙ ҡаушап ҡалды:

- Прамтауар нимә була ул?
- Диттум балларына кейем-һалым, аҙыҡ-түлек алып килә торған нәмә. Нишәйек? Иртән тәүәкәлләйекме әллә? - Файза тупраҡлы устарын ҡаҡты ла, бөйөрөнә таянды, йәнәһе, эште хәл итеп тора.
- Әллә һуң... алһалар.

Уҡыу йылы башланырға торғанда ризалыҡ белдереп килгән кемде лә алырлыҡ хәлдә ине детдом етәкселеге. Ярты сәғәттәй һөйләшеүҙән һуң документтары менән кабинеттан кабинетҡа йүгертә лә башланылар. Директор ҡатын бары тик руссаһының насар булыуына ғына ауырһынды бер аҙ, унан йәш кешенең тиҙ өйрәнеүенә өмөтләнеп, ҡул һелтәне.

Әҙәм башҡармаҫтай хеҙмәт бармы ни? Төн йоҡоларын ҡалдырып ултырһа ултырҙы, тәртибенә төшөндө барыбер Хәтирә. Кәрәкле терминдарҙың руссаһын декламация кеүек итеп ятлап алды. Килоларҙы, хаҡтарҙы, килем-китемде һанап сығарыуға оҫтарҙы. Тәбиғи зирәклеге, бер ҡарауҙан отоп алыу, хәтерҙә ҡалдырыу һәләте ҡотҡарҙы тағы. Белгәнен белгәнсә, белмәгәнен башҡортсалап һөйләп булһа ла аңлатты. Көләп ҡуйһа ҡуйҙы урыҫтар, бороп сығарманы. Тиҙ арала етеҙлеге, ҡушылғанды ерен еткереп, емертеп башҡарып ҡуя белеүе менән хужаларҙың ихтирамын яулап өлгөрҙө. Ышаныстары арткан һайын яуаплылыҡ та ҙурая барҙы. Бер ярты йыл тирәһенән Өфөнән ҡайтарыла торған тауарҙы ла үҙе ташый башланы.

Ҡыш уртаһында аталары фронтта булып йәки ҡара хәбәре килеп, әсәләре йә үлеп, йә аслыҡтан миктәп ҡалған балаларҙы тағы бер оло төркөм итеп йыйып алып килделәр. Араларында Хәтирәнең яҡташтары ла аҙ түгел. Шуларҙы ҡарап, эсе өҙөлә ҡатындың. Йәшәгән бүлмәһе лә хәҙер ошонда булғас, кистәрен халыҡтан йыйып алынған йөндө иләп-сиратып ойоҡбейәләйҙәр, күкрәксәләр бәйләй, ҡыҙ-ҡыркынды өйрәтә. Тегеләре лә апайҙарына әсенеп алды. Йоҡо мәле етеүгә ҡыуып ебәрә алмай аҙаплана хәҙер.

Килгән балаларға Өфө тегеү фабрикаһына һырмалы фуфайкаларға заказ биргәйнеләр, аҙна башында йөк машинаһы менән шулар артынан сыҡтылар. Кабинала махорка борхотҡан дядя Костя эргәһендә тәтөнгә ыҫланып, уның ҡауылдағанын тыңлап ойой бирел юл йөрөп тә бешекте. Әле лә шул хәл. Ауыҙ ситендәге махраһын һелкетә-һелкетә машина геүен еңергә тырышып, ҡарылдап хәбәр һата ҡарт шофер. Хәтирә уның әлеге тарихын ике-өс ҡат тыңлаған, шуға иғтибарһыҙ ғына йоҡомһорап килә.

Төк-төк фуфайкаларҙы складтан һанап алыуға, уның ҡағыҙҙарын тултырыуға ярты көн китте. Ҡабалан ғына сталоуай ашап алып, яҡты күҙҙә тау араларын үтә һалырға кәрәк тип, тағы ҡуҙғалдылар. Юлда Белорет базарына симешкә һатырға китеп барған өс мәрйәне ултырттылар. Юл хаҡына һәр береһе бирәр биҙрә көнбағыш бирә - насармы ни? Балаларға кистәрен бер өмәләп ултырып сирырлыҡ. Мәрйәләр иртәгәнен буласаҡ баҙарға барып ятмаҡҡа тип кислотеп сыҡҡандар икән. Улар менән алыш-биреш итеп төшөрөп ҡалдырҙылар ҙа, һуң булһа ла, отчет менән райсоветҡа туҡтанылар. Тәртибе буйынса тауар бындағы тикшереүселәр тарафынан ҡат-ҡат һаналып, ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйылырға тейеш. Өйҙәренән саҡыртып алдырылған ике ҡатын ҡыҫҡырып һанай-һанай фуфайкаларҙы бер тауҙан икенсеһенә өйҙө, унан өсөнсө ергә күсереп шутланы. Тик ниңәләр һандар теүәл сыҡманы. Өсөнсө тапҡыр һанағанда ла алты фуфайка тулмай аптыратты. Ахырҙа, сисенеп ташлап Хәтирә лә ҡушылды. Тағы ике ҡат һананылар - тулмай. Тулмай! Һанаусылар инде ҡурҡышып, тауар алып ҡайтыусыға төбәлде: ҡалайтабыҙ?

- Тулырға тейеш! Унда ла әллә нисә кеше йөҙ ҡат һананы, - тип эсендәге ҡалтырауын баҫырға тырышып, ҡабаттан өйөмдәргә тотондо ҡатын. Тик нисә генә осона сыҡһалар ҙа шул алтыһы етмәне. Тамам арыған ҡатындар өҫкә хәбәр итергә мәжбүр булды. Бер сәғәт эсендә ҡала-район кимәлендәге детдомға бәйле булған бар етәкселәр ҙә йыйылды. Әллә нисә пар күҙ ҡарап тороуы аҫтында тағы өс ҡабат һананылар ҙа документтар буйынса акт төҙөнөләр. Хәтирәгә текәлеп-текәлеп ҡарап ҡуйһалар ҙа, артыҡ һүҙ ҡуйыртып тороусы булманы. Тамам арып, алйып сығып машинаға ултырғанында дядя Костя ауыҙынан шайығын ағыҙып тороп хырлай ине инде.

**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




# ӘБЙӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ

## Рафаелся

Бер ҡатын Наил менән Рафаил исемле улдарын эйәртеп, ҡалаға барған. Уларҙы йәш сағында заводта бергә эшләгән мәрйә әхирәтендә ҡалдырып, үҙе магазиндар буйлап сығып киткән. Хужабикә малайҙарға аш бешереп ашатҡан. Берәр тәрилкәне бушатҡан ҡунаҡтарға тағы тәҡдим иткән. Наил исемле өлкәне: "Спасибо, наелся", - тип, баш тартҡан. Туйһаң, исемеңде әйтергә кәрәк икән, тип уйлап, бәләкәйе: "Спасибо, рафаелся" - тигән.

## Как ты ел?

Элек аҙыҡ-түлек магазиндарында һөт коктейле һатыла торғайны. Ҡалала эшләп йөрөгән бер башҡорт ҡыҙы ҡунаҡҡа килгән ҡустыһын шул эсемлек менән һыйларға булған.

- Ниндәй тәмле. Быныҡ исеме нисек? - тип һораған ауыл малайы.

- Коктейль, - тип яуап биргән апаһы.

Малай ҡорһағын һыйпап: "Хорошо ел, тик нисек атала һуң?" - тип төпсөнә икән.

- Коктейль тим бит, - апай кеше тағы ҡабатлаған.

- Хорошо ел, тип әйттем дәһә, - тип йәне көйгән ҡусты кешенең. - Исеме нимә, тим бит. Ә һин "Как ты ел да, как ты ел". Хорошо ел, конечно...

## Забил

Кино тигән нәмә ауылдарға килеп етмәгән замандарҙа бер башҡорт ҡатынын Магнитта йәшәгән знакумдары кинотеатрға алып барған. Ауылға ҡайтҡас, тегә бисәләргә маҡтана икән. "Кинонҙың исеме нисек ине?" - тип һораған бер булдыҡлырағы. Ә был ҡатын ул кино тигән нәмәнең исеме була икәнен дә белмәгән, шулай ҙа һыр бирмәҫ өсөн "Нимә генә әле?" тип, иҫләп маташа икән. "Забыл, тиген дә ҡуй", - тигән бая һорау биргән ҡатын.

- Әй, эйе шул, исеме "Забил" ине, - тип ҡысҡырып ебәргән ҡатын.

## Юл ҡағиҙәһе

Элек беҙҙең халыҡ ҡалаға ат менән йөрөгән. Бер мәл ике ҡатын ирҙәрһеҙ генә баҙарға барып ҡайтҡан. Юлда осраған урыҫтар, машиналарын туктатып, быларҙы әрләй икән. Икенсе тапҡыр барғандарында ла шул уҡ хәл ҡабатланған. Нинә беҙ гелән әрләнеп торорға тейеш әле, тип, былар башҡортсалап: "Гурытыһыҙҙы ҡыҙғанып тормағыҙ, барыбер киләбеҙ", - тип, ҡаршы талаша икән.

Ҡайтҡас, ҡатындарҙың береһе иренә: "Башҡа Мәгниткә бармайым, юлда урыҫтар әрләшә", - тигән. Эштең айышын төшөнгән ир:

- Ә һеҙ юлдың ҡайһы яғынан йөрөйһөгеҙ һуң? - тип һораған.

- Ҡайҙан теләйбеҙ, шунан йөрөйбеҙ: уңдан да, һулдан да, уртанан да...

- Һеҙгә бит юл ҡағиҙәһен боҙған өсөн асыуланғандар. Гел юлдың уң яғынан йөрөргә кәрәк.

Өсөнсө сәфәрҙә ирҙең өйрәткәндәрен үтәгәс, ҡатындарҙы берәү ҙә әрләмәгән, рәхәтләнеп йөрөп ҡайтҡандар.

**Гөлнур ШАХМОРАТОВА.**

## Төнгө күршәк

Эмалле һауыт-һаба яңы сыҡҡан мәл була. Бер ҡатын, ҡаймаҡ һалырға йәтеш, тип, төнгө күршәк һатып ала. Бер мәл ҡаймаҡты әлеге күршәккә һалып, Магнит баҙарына китә. Тора-тора, әммә бер кем дә быны ҡаймағын алмай икән. Аптыраған ҡатынға эргәһендә торған берәү күршәктең ысын тәғәйенләнешен аңлатып биргән. Шунан ҡаймаҡ һатыусы эргәһенә туктағандарға "Беҙҙең халыҡ һеҙҙең кеүек күршәккә ултырмай, тышҡа йөрөй", тип әйтергә уйлап: "Сюда наши не срал, сюда ваши срал", - тип, бөтәһен дә өркөтөп ебәргән.

**Сәғиҙә ҒӘЙНЕТДИНОВА.**

## Пиявка

Бәләкәй сағымда күрше апайға эйәреп, ҡалаға барҙым. Ул һөлөк эҙләй ине. Тик һөлөктөң урыҫса нисек әйтелгәнен белмәйбеҙ. "Хулюк" тип һорап, баҙарҙағы, аптекалағы мәрйәләрҙе аптыратып бөттөк. Ахырҙа, бер аптекаға ингәс, "маленькая змея", тип әйтергә баш етте. "Пиявка, что ли?" - тине дарыу һатыусы. "Покажи", - тине күрше апай. Пиявка тигәне, ысынлап та, беҙ эҙләгән һөлөк булып сыҡты.

**Вәсилә БУРАНОВА.**

## Самауыр хаҡы

Өләсәйем Магнит баҙарынан самауыр һатып алып ҡайта. Ауыл өсөн был ул заманда ҙур ваҡиға - күрше-тирә сәйгә йыйыла. "Самауырҙы күпмегә алдың?" - тип ҡыҙыҡһыналар. "Әллә... - ти өләсәй. - Урыҫ "хватит", тип әйткәнсе өсләк аҡсаларҙы һелтәнем дә һелтәнем..."

**Зилдә ЗАҺИТОВА.**

## Икмәк тәме

Һуғыштан һуңғы осор. Ауылда икмәк юҡ. Ҡалала ла уны сират тороп ҡына алып була. Уныһы ла кеше башына - бер буханка. Рәҡыя исемле ҡатын яулыҡтарын алмаштырып ябыныл, сиратҡа ҡатҡат баҫып, өс буханка икмәк ала. Улы ла сиратҡа баҫа.

Ул заманда Магниттың һул ярынан уңына паром менән сығаралар. Паромға ултырғас, шомло хәбәр тарала: "Теге ярҙа милиция тора икән, артыҡ икмәкте тартып алалар". Рәҡыя менән улы артыҡ икмәкте ашарға керешә. Ҡаршы ярға сыҡҡансы икмәкте нормаға ҡалдыра былар. Сыҡһалар, милиция ла юҡ, берәү ҙә тикшермәй икән. Үкенһәләр ҙә, туйғансы бер ашап ҡалалар.

**Мөнирә КАШАПОВА.**

## Девкам чулок

Бер ағайға эйәреп, ҡалаға барҙым. Ул ҡыҙҙарына ойоҡ алырға булды. "Какой размер?" - тип һораны һатыусы. Ағай етди ҡиәфәт менән бармаҡтарын бөгәбөгә: "Один класс, два класс, четыре класс", - тип, ҡыҙҙары уҡыған кластарҙы һанай башланы. "И бабке", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Һатыусы көлә-көлә кәрәкле размерҙағы ойоҡтарҙы һайлап бирҙе. Мин, ауылдашымды асыуландырыуҙан унайһыҙланып, көлкөмдө тышҡа сығарып "бушаттым".

**Иршат ИХСАНОВ.**

## Әйттем бит

Беҙҙең ауылдан ҡалаға барған ике ҡатын магазиндар буйлап йөрөй. Йәшерәге иренә баш кейеме алырға уйлай.

- Кәпәс урыҫса нисек була икән? - тип һорай икән.

- Шапка, - тигән олоһо.

- Юҡтыр, шапка бәләкәстәр өсөн бит ул, - тип быныһы ризалашмаған.

Һатыусынан һорарға ҡыймай, ҡатындар урамға сыҡҡан. Шунда олоһо беренсе осраған ирҙең кәпәсен тартып алған да: "Что это называется?" - тип һораған. Бындай әрһеҙлеккә аптыраған урыҫ: "Шапка!" - тип екергән. "Әйттем бит", - тип, апай әхирәтен етәкләп, кире магазинға алып ингән.

**Фәрзәнә ЮЛМӨХӘМӘТОВА.**

## Фил на гармошке играет

Магнитка барырға йыйынған атайыма әсәйем: "Сәй алып ҡайт. Тышында фил гармун уйнап ултырғанын ал", - тип әйтеп ебәрә.

Атайым сәй һатылған урында кәштәләргә күҙ йүгертә башлай. Һатыусы: "Что вы хотели?" - тип килеп етә. Атайым: "Дайте чай, где фил на гармошке играет", - ти. Һатыусы аптырап, ҡат-ҡат һорай икән. Шул саҡ "фил" урыҫса "слон" була икәне атайымдың иҫенә төшкән. Оялыштан ул магазиндан сығып тайған. Тышҡа сыҡҡас, үҙ алдына көлә-көлә сәй алмай ҡайтып киткән.

**Регина БУЛАТОВА.**

## Драже-дрожа

Өлкән улым менән Магнитка барырға булғас, Мәғмүрә килен үҙенең улын эйәртеп ебәрҙе. Бер магазинда сиратта торғанда Әсләм витринаға күрһәтеп: "Инәй, әсәйем икмәк әсетә торған дрожа алырға ҡушты, ана ята", - тине. "Әйҙә һуң, алайыҡ", - тип, үҙебеҙгә лә, уларға ла икешәрҙән алдым. Ҡайтҡас, икмәк әсетәйем тип, ҡапты асып ебәргәйнем, иҙәнгә ваҡ ҡына түңәрәк кәнфиттәр һибелеп китте. Баҡһаң, улар "драже" тип атала икән. Иллә-мәгәр ике ғаилә балалары ҡыуанды.

**Мәфтуха МУСИНА.**

## Килдем дә индем

Әбделғәзе ауылынан бер бабай сана һөйрәтеп, Магнитка баҙарға бара. Ҡайтырға сыҡҡанда көслө буран сыға. Дәүләт ауылына етеүгә ҡараңғы төшә. Бабай берәй өйҙә ҡунып, иртәгеһен юлын дауам итергә уйлай. Тәҙрәһенә тиклем ҡарға күмелгән бер өй эргәһенә килә лә: "Эй, хужалар, йоҡларға индерегеҙ әле", - тип әйтеп тә өлгөрмәй, артында торған санаһы шыуып китеп, хәйерһеҙ юлсыны төкөй. Тәҙрәне ватып, санаһы-ние менән өйгә шыуып килеп төшкән бабайға: "Ah-ah, рәхсәтһеҙ килдем дә индем", - тиеүҙән башҡа сара ҡалмай.

**Миңзәлә АСҠАРОВА.**

## Берлектәрҙе һалһам ни була?

Күршебеҙ Сәлиха еңгәй менән әсәйем баҙарға көзә дебете һатырға бара. Тауарҙары үтемле була. "Әлдә жуликтар күренмәй", тип ҡыуанып, Хәсән ағайымдарҙың фатирына китәләр. Сәй эсеп, ял итеп алғас, Сәлиха еңгәй аҡса һанарға ултыра. Өслөк менән биш һумлыҡ аҡсаларҙы - тәҙрә төбөнә, берлектәрҙе, һанға һуҡмай, иҙәнгә һала. Тышта ҡараңғы, бер ни ҙә күренмәй. Әмәлгә ҡалғандай, тәҙрә асыҡ була. Еңгәй аҡсаларын һалып та бөтә, тыштан бер ҡул һонолоп, аҡсаларҙы тартып та ала. Ни эшләргә белмәй аптыраған Сәлиха еңгәй: "Тәҙрә төбөнә, исмаһам, берлектәрҙе һалһам ни була?" - ти.

**Фатима ҺИБӘТОВА.**

## Һаумы, гәзиттәш!

Элегерәк Әбйәлил районының "Осҡон" гәзитендә "ГАИ мөйөшө" исемле рубрика донъя күрә торғайны. Унда иҫерек килеш машина йөрөткән шоферҙарҙың исемлеге баҫыла ине. Колхозда баш белгес булып йөрөгән яҡташым унда водителенең исем-шәрифен күргәс:

- Бөтә районға исем һатып йөрөйһең, кемдең шоферы - шуныҡы, тиерҙәр, минә алкаш кәрәкмәй, - тип, егетте эштән бушата.

"Донъя - ҡуласа" тигәндәй, ике айҙан баш белгестең исеме лә "ГАИ мөйөшөн"дә урын ала. Юғары белемле, вазифалы кешегә бит йыртып, тураһын әйтергә ҡыймай элекке шофер, күргән һайын ни бары: "Һаумы, гәзиттәш!" - тип кенә сәләмләй.

**Илдар ИСЛАМОВ.**

## Намаҙымды боҙҙоң...

Илленсе йылдар аҙағында Хәлил ауыл Советына радио үткәрәләр. Бер ғаиләрадиоалғысты һүндерергә онотоп, клубҡа концерт ҡарарға китә, ә өйҙә яңғыҙ әбей ҡала. Радио һөйләй ҙә һөйләй, ти. Әбей, штепселде һурып алып, ауыҙын розеткаға терәй ҙә: "Теңкәмә генә тейҙең бит, намаҙымды боҙоп бөттөң. Етер, лыҡылдама", - тип әрләп-әрләп, тегә штепселде кире тығып ҡуя икән. Радио йәнә һөйләй ҙә китә, ти. Ул шулай балалары ҡайтҡансы ыҙаланған.

**Зәһрә ХАНСОЛТАНОВА.**

## Телде онотҡан, имеш...

Элегерәк беҙҙең ауылдан бер егет армияла хеҙмәт итеп ҡайта. Әсәһе улына ни алып, ни һалып бирергә белмәй, өйөрөлөп-сөйөрөлөп йөрөп һыйлай икән: "Кана, улым, аша. Әрмелә ниндәй тәмле ризыҡ булһын. Өй ашы таңныҡтыр".

Ә тегеһе, йәнәһе, туған телен онотҡан: "Бер ни аңламаус, әсәүес-атауыс, ҡоймаҡауыс, ашауыс", - тип тик ултыра икән. Атаһының йәне көйөп киткән дә: "Ҡоймаҡауыс ашауыс килһәүес, тышҡа сығауыс та утынды ярауыс, тиҙәкте түгәүес", - тип екергән, ти.

**Әнүзә САФИНА.**

## Украинса аңламағас ни...

Етмеш бишенсе ҡоролоҡ йылында күп кешеләрҙе Украинаға һалам бәйләргә ебәрҙеләр. Беҙҙең колхоздан барған бер ағай ашханала сиратҡа баҫа. Украин ҡатыны: "Скильки вам?" - тип һорай ("сколько" тигән һүҙе инде). Ағайыбыҙ: "Нет" - ти. Ашнаҡсы аптырап: "Скильки вам, һоворю?" - тип ҡабатлай. "Нет, без кильки", - ти икән был. Сираттағылар шаулаша башлағас, ҡатын асыулана һәм: "Ну, скильки вам?" - тип аҡыра. Шунан яҡташыбыҙ: "Ладно, давай с килькой", - тиген ти.

**Мөнирә КИРӘЕВА.**

✔ *Тынысланып, күҙҙәремдең йылтырап китеүен күреп, олатайым ике ҡуллап башымдан тотоп өшкөрөүгә күсте. Маңлайымдан бөрсөк-бөрсөк тирҙәр сыҡҡансы өшкөрҙө. Ул өргән һайын тын юлдарым киңәйгәндәй булды.*



ИНТЕРНЕТТАН



# РӘСӘЙҘӘР...
## табипҡа ышанмай

■ Яман шеш ауырыуының аныҡ ҡына билдәләре юҡ, шулай ҙа ҡайһы бер билдәләргә иғтибар итеү кәрәк, ти белгестәр. Америка ғалимдары был сиргә хас билдәләрҙең исемлеген төҙөгән. Тәүге урында йүткереү тора. Йүткереү бер нисә аҙна дауамында үтмәй икән, хәүефләнергә урын бар. Эс күбеү ҙә хәүефле сигнал. Уға ауырлыкты юғалтыу, арыу, арҡа ауыртыу кеүек билдәләр өҫтәлә икән, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Был бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағыла. Бер сәбәпһеҙ тән температураһы йыш күтәрелһә йәки гел генә юғары булһа, арыһағыҙ, лимфа төйөндәре ҙурайһа, тирелә үҙгәрештәр булһа, онкологҡа күренеү яҡшы. Шулай уҡ күп ауырыуҙар үҙәк көйөүе, ашҡаҙан ауыртыуы, йота алмай башлау кеүек билдәләргә иғтибар итмәй. Ҡапыл ғына ябығыу ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалырға тейеш түгел.

■ Рәсәй халҡының 35 проценты үҙаллы дауаланырға ярата. 57 проценты табиптарға мөрәжәғәт итә, тип хәбәр итә Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге белгестәре. Һорау алыуҙар һөҙөмтәһе буйынса, 46 процент халыҡ ауырыһа дәүләт поликлиникаларына бара, 11 проценты түләүле клиникаларға йөрөй. Яуап биреүселәрҙең 4 проценты бөтөнләй дауаланмай, 1 проценты халыҡ табиптарына ғына ышана. Әйткәндәй, был һандар ике йыл үткән һорау алыуҙарҙан бөтөнләй айырылмай тиерлек. Үҙенең сәләмәтлеге менән рәсәйҙәрҙең 35 проценты ғына маҡтана ала. Дөйөм алғанда, һуңғы 10 йыл эсендә үҙенең сәләмәтлеге менән ҡәнәғәт булыусылар һаны 24 проценттан 15 процентҡа тиклем кәмегән. Күптәр һаулығын нығытыуға ҡамасаулаған факторҙар рәтенә эш күп булыуын, стресты, дарыуҙарҙың ҡиммәт булыуын индерә. Белгестәр үҙаллы дауаланыусыларҙың артыуына хәүефләнә. Был халыҡтың медицина учреждениеларына ышанмауы, шул уҡ ваҡытта дарыуҙар һатып алыу мөмкинлеге булыуы менән аңлатыла.

■ Йылмайыу - йәшлек һәм яҡшы кәйеф билдәһе, тибеҙ. Әммә Көнбайыш Онтарио университеты ғалимдары билдәләүенсә, йылмайыу кешене олоғайтып күрһәтә икән. Ғалимдар экспериментта ҡатнашыусыларға фотолар күрһәткән. Унда йылмайған, етди һәм аптыраулы ҡиәфәттәге кешеләрҙең фотоһо тәҡдим ителгән. Аптыраулы ҡиәфәттәгеләрҙе - иң йәше, ә йылмайып төшөүселәрҙе иң ҡарты тип билдәләгән ҡатнашыусылар. Белгестәр фекеренсә, был ҡараш йылмайыу һөҙөмтәһендә күҙ тирәләрендә һырҙар барлыҡҡа килеү менән бәйле. Аптыраған саҡта һырҙар, киреһенсә, тигеҙләнә.

■ Британия ғалимдары раҫлауынса, йылы ванна инеү ҡартайыу процесын әкренәйтә. Был саҡта ҡанда стресс гормоны - кортизол күләме түбәнәйә. Ә был гормон ҡартайыу процесында ҙур роль уйнай. Ул йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы, үпкәләрҙең эшмәкәрлеген кәсәйтә һәм шул уҡ ваҡытта иммун системаһын, аш һеңдереү процесын әкренәйтә. Кортизол күләме юғары булғанда организмдан натрий сығарылмай, ҡан баҫымы, ҡанда шәкәр күләме күтәрелә. Әҫе ванна кортизол һәм шәкәр күләмен түбәнәйтә.

МАТУР ХӘТИРӘ

**Көҙ аҙағы. Ҡыш үҙенең түҙемһеҙлеген күрһәтергә тырыша инде - ваҡытынан алда тундыра ла башланы. Тереклектең һыуыҡтар башланыуына интегә-интегә өйрәнеп килеүе. Төрлө сирҙәр ҙә ошо миҙгелдәр алышыныуын көтөп кенә торалыр, ахыры, дауаханаларҙа сираттар оҙонайа, аптекаларҙа аҡса әйләнеше күпкә арта. Ауырыуҙары ла, һауҙары ла, халыҡ имен-аман ҡышты сығырға тиғән өмөт менән юлын дауам итә. Күптәре йөйҙән уҡ әҙерләнә: ҡышҡылыҡҡа һәр төрлө ысул менән емеш-еләген, үлән-тамырын һаҡлай. Минә ҡалһа инде, ул сирҙәрҙең береһен дә ҡалдырмайым тиерлек, ҡайсаҡ түшәктән дә тора алмай, ҡайсаҡ эштән дә айырыла алмай аяғөҫтө генә үткәреп торам. Һәм шулай сирләгән һайын бала саҡта булған бер ваҡиға һағындырып ҡына иҫкә төшә.**

# ӨШКӨРӨҮ КӨСӨ



Атайым үлгәндең икенсе ҡышы. Ноябрь-декабрь айҙары булғандыр, үлеп китһәм, шыршы байрамында була алмайым инде, тип бошоноп ятҡаным иҫтә. Беҙ, ағайым, апайым һәм мин, кизеү менән бик ҡаты сирләп, барыбыҙ ҙа түшәккә йығылдыҡ. Ғаиләлә бер әсәйем генә сирләмәй ҡалды. Тынғыһыҙ колхоздағы эше өҫтөнә өйҙәге мал да, утын-һыу ҙа, балаларының сире лә әсәйемдең яңғыҙ иңенә төштө. Көн тимәй, төн тимәй, беҙҙе ҡарап өс ҡарауат араһында сабыуы. Ағайым менән апайым арыулана башланы, ә минең хәл һаман мөшкөл ине. Беҙҙең ауырышҡанды ишеткәндәр инде, бер көн атайымдың атаһы олатайым килеп керҙе. Әсәйем менән иҫәнләште лә, беҙҙең яҡҡа күҙ һалғас, тауышын әкренәйтә биреп, хәлдәребеҙҙе һораша башланы. Уларҙың һөйләшкәнен ишетер-ишетмәҫ кенә ятһам да, әсәйем минең хәлдең һыңғайға бармауын әйткәнен аңланым. Ул арала йоҡлап киткәнмен, әсәйемдең: "Ҡыҙым, кил, ситкәрәк шылып ят әле", - тигәненә уянып киттем. Олатайым баш ҡағып ҡына һаулашты ла, ултырғыс менән ҡарауатым янына йәтешләп ултырҙы, ике ҡуллап маңлайымды, ҡулдарымды тотоп ҡараны. Унан әкрен генә, моңло тауышы менән шундай килешле итеп аятын уҡый башланы. Ошо аяттар менән атайымды һуңғы юлға оҙатыуҙары иҫкә төштө бит. Тамағыма төйөн тығылды, күҙгә йәштәр эркелде. Илауымды күрһәтмәҫ өсөн күҙҙәремде йомдом. Олатайым аятын уҡый-уҡый, йомшаҡ ҡулдары менән әкрен генә йәштәремде һөрттө. Бер нәмә лә өндәшмәне, әммә маңлайымдан һыйпап, түшемә ҡулын һалып, сабыйҙарҙы йоҡлатҡандағы кеүек тапап йыуатты. Ә минең йәштәрем туҡтамай аҡты ла аҡты. Күпмелер ваҡыттан тынысланып, йоҡлап киткәнмен. Минә оҙаҡ йоҡлаған һымаҡ тойолһа ла, оҙаҡ булмағандыр, тағы уянғанда олатайым һаман аят уҡый ине әле. Мин артабан уның тауышының матурлығына һоҡланып тыңлап ята башланым. Ошо моңло тауышта күпме һағыш сағыла. Уның ҡайҙан килгәнлеген дә һиҙәм мин. Атайым үлгәндә йәсин сыҡты ла олатайым, атайымдың күкрәгенә ятып, сеңләп-сеңләп илап ебәрҙе. Оҙаҡ түгел, әлбиттә, тиҙ тыйылды. Унан башын аҫҡа эйеп, шәп-шәп атлап сығып китте.

Олатайым зыңғырлатып ҡына аятын уҡып бөттө лә, кеҫәһенән тиҫбеһен алып тарта-тарта, доғаларын теүәлләне. Ыҡсым ғына һаҡалының тилбер генә һелкенеүе минә ҡыҙыҡ тойолдо. Тынысланып, күҙҙәремдең йылтырап китеүен күреп, олатайым ике ҡуллап башымдан тотоп өшкөрөүгә күсте. Маңлайымдан бөрсөк-бөрсөк тирҙәр сыҡҡансы өшкөрҙө. Уның тыны шундай саф, шундай тәмле ине. Ул өргән һайын тын юлдарым киңәйгәндәй булды.

Күпме йоҡлағанмындыр, әммә уянып, күҙҙәремде асҡанда, бөтә донъя шундай нурлы яҡтылыҡҡа күмелгән. Күпмелер ваҡыт ҡуҙғалырға ҡурҡып, күҙәтеп кенә яттым да, сыҙамай, башымды күтәрҙем. Өйҙә бер кем дә юҡ. Ҡуҙғалып, ситкә бүлмәгә күҙ һалдым. Мейестә сыр-сырт килеп әкрен генә ут яна. Ҡаҙанда ит ҡайнай. Ҡаҙ һурпаһының тәмле еҫе өйгә таралған. Үҙемде шундай еңел тоям. Хатта күбәләк кеүек осоп та китер һымаҡмын. "Бына бит Хоҙай ҡөҙрәтенең көсө", тип шатланды әсәйем. Мин дә әсәйемә ҡушылып, эстән генә олатайыма рәхмәттәр уҡып, тиҙ-тиҙ генә кейенергә керештем.

Бәхетле бала саҡ атай-әсәйҙәрҙең наҙында, олатай-өләсәйҙәрҙең һағында, туғай-болондарҙа тәгәрәп уйнап, йәлп итеп кенә үткән дә киткән шул. Олатайым кеүек көслө дин әһелдәре лә юҡ шикелле хәҙер. Ул бер ҡасан да үҙенең белеме, ҡөҙрәтле көсө менән маһайып, хәбәр һатып йөрөмәне. Баш баҫып донъя көттө. Ҡулынан килмәгән эше булманы. Беҙҙең совет осоронда дини кешеләрҙән мәрәкәләп көлөү ҡаҙимгә эш һаналды. Минең олатайым уларҙы ишетмәне лә, ишеткәнендә лә көйәләнмәне, диненә тоғро ҡала килде. Ерҙә кешелек бар икән, тыуым да, үлем дә йәнәш. Тыуғанында ла, үлгәнендә лә кисә мәрәкә ҡылып ултырған халыҡ үҙе йүгереп килде олатайыма. Бер ҡасан, бер кемдең йомошон инҡар итеп ултырманы. Яңы тыуған сабыйҙарға исем бирҙе, яңы һалынған нигеҙҙәргә аят уҡыны, күпме парҙарҙы никахлаштырҙы, ауырыуҙарын өшкөрҙө, мәйеттәрҙе тәрбиә ҡылып, һуңғы юлға оҙатты. Күпме көс талап ителгән, ә бер ҡасан да, арыным, йәиһә, өлгөрә алмайым, тигәне булманы. Донъяһы ялтырап ятты.

Олатайым шулай аяттарҙың һәр билдәһен, һәр нөктәһен урын-еренә еткереп, шундай моңло, шундай һағышлы тауышы менән тыңлаусының күнеленә үтеп, уны аҡтарып сығара алған, ап-аҡ ҡына сәлләлә, ҡөҙрәтле мулла булып күңелемә һеңгән. Үҙем сирләгән һайын "Их, ошо мәлдә олатайым килеп өшкөрөп кенә китһә ине", тип һағынып иҫкә алам.

**Рәшиҙә МАНСУРОВА.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ЮҒАРЫ БЕЛЕМЛЕ БУЛЫУ
## рухи юғарылыҡҡа өлгәшеү түгел әле



**"Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһына М. Әҙһәмов тигән уҡыусынан да яуап килде: "Бик фәһемле кинәйә, - тип башлап киткән ул хатын. - "Ғалим менән дөйә ҡыуыусы" кинәйәһенә таянып, уҡымышлы, белемле кеше тураһында фараз йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Юғары белем алырға теләүсе башта ниндәй маҡсат ҡуя? Күптәр абруй һәм дан яулауҙы күҙ уңында тота. Берәй вазифалы урын да ҡамасауламаҫ, әлбиттә. Был юлға баҫҡандар, ҡағиҙә буларак, үҙенең рухи тәғәйенләнеше тураһында уйлай һалып бармай. Уҡып бөткәс, үҙе белгәнде ул башҡаларға тарата. Миҫал өсөн көтөүсе һөнәрен алып ҡарайыҡ. Ул көнөн тәбиғәт ҡосағында үткәрә. Уның аңы технократик белем менән ағыуланмаған, әммә уны кемегеҙ, батырсылыҡ итеп, аҡылһыҙ тип әйтә ала? "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһендәге кеүек, рухи яҡтылыҡ биреүсе "ҡояштың" тәүге нурҙары бер ҡатлы булып күренгән "белемһеҙ" көтөүсенең күңеленә лә төшөүе мөмкин түгелме?"

**Шулай итеп, яңы кинәйә: "Дөйәндә бәйләргә онотма"**

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һүҙен тыңлау өсөн халыҡ күпләп йыйыла торған булған. Улар араһынан берәү бәйғәмбәрҙән һәр һүҙен бигерәк тә иғтибарлап тыңлаған, доғаларҙы ла бар күңелен биреп уҡыған. Кис булғас ҡына майҙандан киткән. Бер минут та үтмәгән, ул яр һалып кире йүгереп килгән һәм ҡалтыранған тауыш менән аҡыра башлаған: "О, әфәндем! Мин һине - Аллаһтың рәсүлен тыңлар өсөн бөгөн дөйә менеп килгәйнем. Дөйөм әллә ҡайҙа булған! Мин бит һинең һәр һүҙеңде йотлоғоп тыңланым һәм Аллаһтың ҡөҙрәтенә ышандым. Шул арҡала дөйәһеҙ тороп ҡалдым! Ошо буламы ни Илаһи Хәҡиҡәт? Минең инаныуым өсөн "бүләк"ме был?" Мөхәммәт бәйғәмбәр был кешенең рух төшөнкөлөгөнә бирелгән һүҙҙәрен тыңлап бөткәс, шәфҡәтле йылмайып, былай тигән: "Аллаға ышан, әммә дөйәңде ышаныслыраҡ итеп бәйлә".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҮҘАЛЛЫ ДАУАЛАНМА -

## онлайн-табиптан кәңәш һора

**Тормошобоҙға интернеттың килеп инеүе, бер яҡтан, уңайлы - тиҙ арала хәл итәһе мәсьәләләрҙе башҡарып, кәрәкле кешене эҙләп табып, бихисап проблемаларҙы заманса технологиялар аша ғына эшләргә мөмкин. Ошоно күҙ уңында тотоп, Бөтә Рәсәй Йәмәғәт халыҡ фронтының Башҡортостан бүлексәһе ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы ҡарамағындағы йәмәғәт советы эксперты, медицина фәндәре кандидаты Эдуард Ғәптрәкипов "Башҡортостанда онлайн-табип" медицина консультациялары проектын көнкүрешебеҙгә индереп ебәрҙе. Бөгөн әңгәмәбеҙ ошо сервис, уның халыҡҡа ярҙамы хаҡында.**



➔ **Эдуард Хәлил улы, табиптар, үҙаллы дауаланыу менән шөғөлләнмәгеҙ, тип иҫкәртеп торғанда, һеҙ телемедицина тигән яңы йүнәлеште пропагандалайһығыҙ. Уның маҡсаты нимәлә?**

- Ошо йүнәлешкә тотонорҙан алда мониторинг үткәрҙек һәм шуны асыҡланыҡ - 2015 йылда интернеттың эҙләү системаһы аша айына республиканың 35 мең кешеһе теге йәки был ауырыуҙы нисек дауаларға икәнен эҙләй, кәңәш һорай. 2016 - 2017 йылдарҙа был күрһәткес ике-өс тапҡырға артып киткән һәм был һандар үҙҙәре үк бындай хеҙмәткә ихтыяж барлығын раҫлай. Күпселек осраҡта интернет селтәрендәге "кәңәш"тәрҙең эҙемтәһе булып сирҙең киҫкенләшеүе, артыҡ сығымдар һәм дауаханалар юлын тапау тора. Әгәр кешенең кәңәшкә ихтыяжы бар икән, ни өсөн уға табиптарҙан онлайн ярҙам алмаҫҡа? Телекоммуникацион консультациялар биреү идеяһы шулай тыуҙы ла инде. Сервиста бөгөнгә 73 белгес эшләй. Ике йыл эсендә 73 меңдән ашыу консультация бирелгән. "Бәйләнештә" селтәрендәге төркөмдә 13 мең кеше теркәлгән, порталдың үҙендә 11700 ҡулланыусы иҫәпләнә. Көн һайын төрлө белгестәргә барлығы 100 һорау килә.

Был, минеңсә, интернеттағы төрлө сығанаҡтарҙан теләһә кемдән алған кәңәшкә ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ һәм поликлиникаларҙағы сираттарҙы ла кәметергә тейеш. Беҙҙең өсөн иң мөһиме - кешене үҙ аллы дауаланыуҙан аралап ҡалыу. Тағы шуны ла әйтер инем - проект социаль йүнәлешле һәм бушлай, ул бер төркөм табиптар һәм программистар тарафынан ойошторолоп, уларҙың энтузиазмы ярҙамында тормошҡа ашырыла.

➔ **Бындай ысул, киреһенсә, үҙаллы дауаланыуға этәргес бирмәйме, сөнки кеше консультация алып, белемен ниндәйҙер кимәлдә тулыландырһа, "белгескә" әйләнә бит.**

- Мөрәжәғәт итеүселәргә беҙ консультация ғына бирәбеҙ, ә дауаламайбыҙ һәм нисек дауаланырға кәңәш итмәйбеҙ. Ә консультациялар сәләмәт тормош алып барыуға, сирҙәрҙе профилактикалауға, ниндәй белгескә барырға, ниндәй тикшереү үтергә кәрәклегенә ҡағыла һәм анализдарын "уҡырға" ярҙам итәбеҙ. Бөгөн табиптарға онлайн йәки телефон аша яҙылып була, тиһәләр ҙә, сираттар һаман да бар һәм ниндәйҙер белгескә эләгер өсөн икешәр аҙна көтөргә тура килә. Ҡайһы берәүҙәр консультация алыр өсөн генә табипҡа яҙылырға мәжбүр. Бөгөн ауылдарҙа әллә нисә ауылға бер ФАП тура килә, шул уҡ ваҡытта һәр йортта тиерлек интернет бар. Ә бит күптәргә тап ваҡытында дөрөҫ йүнәлеш биреү генә кәрәк. Әгәр ошо сират сылбырынан "һорарға ғына кәрәк" тигән категорияны алып ташлағанда, сираттар проблемаһы хәл ителер ине, моғайын. Был хеҙмәт менән хатта кеҫә телефондары өсөн эшләнгән ҡушымтаны яҙҙырып алып та файҙаланырға мөмкин. Сөнки халыҡтың 25 проценты медучреждениеларға кәңәш алыу өсөн генә килә. Ә шуның өсөн улар күпме ваҡытын сарыф итә. Мәҫәлән, кеше табипҡа берәй ере ауыртыуға зарланып килде икән, табип уны тыңлай, анализ бирергә ебәрә, анализдар әҙер булғансы нимәләр эшләргә кәрәклеген әйтә. Әммә был уға диагноз ҡуйыу тигәнде аңлатмай. Быны өйҙә генә ултырып, интернет аша ла белешергә мөмкин.

➔ **"Башҡортостанда онлайн-табип" сервисында йышыраҡ ниндәй белгестәргә мөрәжәғәт итәләр?**

- Статистика күрһәтеүенсә, терапевтарға, гинекологтарға, дерматовенерологтарға, тиҙ ярҙам фельдшерҙарына, балалар неврологтарына, балалар һәм дөйөм практика хирургтарына, педиатрҙарға, неврологтарға, кардиологтарға, гастроэнтерологтарға, сабыйҙарҙы имеҙеү буйынса белгескә, ортопедтарға, йоҡо буйынса белгескә, психологтарға, сексологтарға, нейрохирургтарға, стоматологтарға, урологтарға мөрәжәғәттәр бик күп. Проекттағы табиптарҙың күбеһе медицинала ҙур тәжрибә туплаған, юғары һәм беренсе класлылар. Һәм улар өсөн табиплыҡ һөнәр генә түгел, ә йәшәү рәүеше. Көн тимәй, төн тимәй, алһыҙ-ялһыҙ халыҡҡа хеҙмәт итәләр. Кәрәк икән, айырым осраҡтарҙа консилиум йыябыҙ һәм бер нисә белгестең ярҙамы кәрәк булғанда, табиптар коллектив ҡарар ҡабул итә. Беҙҙең өсөн иң мөһиме - кеше үҙаллы дауаланмаһын, ә ваҡытында ярҙам алып, һау-сәләмәт булһын.

➔ **Статистика күрһәтеүенсә, сервис көндән-көн ҡулланыусылар араһында популярлыҡ яулай бара. Ә был эшмәкәрлегегеҙ БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан хуплау таптымы?**

- Проект БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығында, БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһында, РФ Президенты ҡарамағындағы Рәсәй халыҡ хужалығы академияһында презентацияланды, шулай уҡ Өфөнөң Бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү һәм үҫтереү фондында ла хуплау тапты, сөнки ул халыҡтың медицина грамотаһын күтәреүгә булышлыҡ итә. Әле эшмәкәрлегебеҙҙе артабан да камиллаштырыу өҫтөндә эшләйбеҙ һәм дауалау учреждениелары менән хеҙмәттәшлек мәсьәләһен хәл итәбеҙ.

Был эште киң йәйелдергәндә ул табипҡа үҙенең участкаһында пациент менән даими бәйләнештә булырға, уның сиренең клиник ағышын күҙәтергә, кәрәк икән, күренергә килергә саҡыра аласаҡ. Әгәр проект Башҡортостанда үҙенең кәрәклелеген раҫлаһа, уны тотош Рәсәйгә таратырға мөмкин буласаҡ, йәғни башҡа субъекттар үҙҙәре үк ошондай берҙәм онлайн-консультациялар сервисы ойоштора башлаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәмғиәт ни өсөндөр яңылыҡты тиҙ ҡабул итеп бармай: беренсенән, күп осраҡтарҙа "ауыҙы бешкән" халыҡ һыуыҡ ҡатыҡты ла өрөп ҡабырға тырыша, икенсенән, алдынғы проекттарҙы власть бик өнәп тә бөтмәй - эйе, яҡшы, шәп, тип хуплай ҙа, уны ҡулланыуға индерергә ашыҡмай. Ә бына телемедицина сервисы менән файҙаланыуҙы бер кем тыя алмай, киреһенсә, үҙенең һәм башҡа кешенең ваҡытының ҡәҙерен белеүселәр был проекттың тормоштарына килеп инеүенә рәхмәтле генә буласаҡ.**

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Йыһан кемделер айырып ҡарамай

Әгәр иртәгә уянғанда төн эсендә 20 килограмға артҡанығыҙҙы тойһағыҙ, ҡурҡыр инегеҙме? Әлбиттә! Шунда уҡ тиҙ ярҙам саҡыртырһығыҙ, моғайын. Әммә шул уҡ күренеш яйлап тормошҡа ашҡанда, йәғни артыҡ ауырлыҡ көнләп, айлап өҫтәлгәндә, быға күҙ йомабыҙ.

Бөгөн бюджет сигенән сығып, артыҡ һум тотонабыҙ икән, бының бер ҡурҡынысы ла юҡ. Ләкин быны көн һайын ҡабатлаһаҡ, бөтөнләй аҡсаһыҙ ҡаласаҡбыҙ. Банкротлыҡ, артыҡ ауырлыҡ, айырылышыуҙар - ҡапыл барлыҡҡа килгән һәләкәттәр түгел. Кешеләр быға яйлап, сәғәтләп, көнләп килә. Һан сифатҡа әйләнһә, ниндәйҙер ваҡиға була, шул ваҡытта ғына кеше: "Ни өсөн шулай булды һуң?" - тигән һорау бирә.

Тормош - тупланыусы система. Бер ваҡиға икенсеһен тулыландыра, улар ташты тишкән тамсы кеүек, бер урынға йыйыла. Көн һайын үҙебеҙгә: "Ҡайҙа китеп барам? Былтырғыға ҡарағанда сәләмәтерәк, бәхетлерәк һәм ҡәнәғәтерәкменме?" - тигән һорау бирергә кәрәк. Шулай түгел икән, тормошоғоҙҙа нимәнелер үҙгәртеү зарур. Бәлки, һеҙҙе бер ни тиклем ҡурҡытырмын, әммә тормошта бер ниндәй тигеҙлек тә, бер ниндәй статус-кво ла юҡ. Һәр мәл - камиллыҡҡа ынтылыш йәки деградация.

## Тәртип (дисциплина)

Күңелегеҙ ятмаған ваҡ-төйәк менән булышырға үҙегеҙҙе мәжбүр итегеҙ һәм һуңынан бөтөн ғүмерегеҙ буйына үҙегеҙгә оҡшаған эш башҡарырһығыҙ.

Тәртип һүҙе күптәргә оҡшамай. Моғайын, популярлыҡ буйынса уны "дантист" менән "диарея" араһына урынлаштырырға булыр ине. Әммә үҙенде тәртипкә өйрәтеү - мөһим нәмә. Сөнки тормош оҙайлы һөҙөмтәләр файҙаһына минутлыҡ ҡәнәғәтлектән баш тартырға мәжбүр итә. Ваҡ-төйәктә үҙтәртип - кис буйы телевизор алдында ултырмайынса дәрес әҙерләү - яйға һалынған һөҙөмтәгә килтерә, баһалар яҡшыра, белем арта. Аҙнаһына өс тапҡыр спорт залына йөрөү сәләмәтлек өҫтәй. Аҙнаһына 20 долларҙы тотонмай йыйып барыу байлыҡ тупларға ярҙам итә. Үҙенде тәптипкә өйрәтеүҙең сере бөтөнләй ҡорос ихтыярлы булыуҙа түгел. Уның асҡысы - теге йәки аҙымды ни өсөн яһағанығыҙҙы ныҡлы белеүҙә. Ни өсөн бурыстарҙан ҡотолорға теләүегеҙҙе белһәгеҙ, аҡса экономиялау еңелерәк буласаҡ. Ни өсөн белем кәрәк икәнен аңлаһағыҙ, уҡыу еңел бирелгән кеүек тойоласаҡ.

Тәртип тураһында тағы ла шуны әйтергә мөмкин: әгәр тормошоғоҙҙа үҙегеҙ тәртип булдыра алһағыҙ, быны һеҙҙең өсөн тирәяҡтағылар эшләмәҫ. Һөҙөмтәлә үҙ тормошоғоҙ менән үҙаллы идара итәсәкһегеҙ, бер кем дә һеҙгә нимә эшләргә, нимә эшләмәҫкә икәнен өйрәтеп, кәңәш бирмәҫ.

Әгәр эске тәртибегеҙ юҡ икән, уны һеҙгә башҡалар мәжбүри өйрәтәсәк. Ихтыярһыҙ кешеләрҙе етәкселәре йәберләй. Бөтөнләй ихтыярһыҙ кешеләр артынан бик йыш төрмәлә ултырыусылар күҙәтә!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ.

# "БЕРҘӘМЛЕК" КИЛӘ

**Башҡортостанда 7-12 июндә "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале үтәсәк. Фестивалде РФ Мәҙәниәт министрлығы, Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто, БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы һәм Салауат райондары, Өфө ҡалаһы хакимиәттәре ойоштора.**

Халыҡ ижадын, һынлы сәнғәтте, төрлө кәсептәрҙе популярлаштырыу, сит ил ижадсылары менән элемтә булдырыу, төрлө мәҙәниәттәр һәм йолалар менән таныштырыуҙы маҡсат иткән был сара республикабыҙ өсөн генә түгел, тотош Рәсәй өсөн мөһим ваҡиғаларҙың береһе. Быйыл ул 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә уҙасаҡ.

Быйыл "Берҙәмлек" фестивален республиканың Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы, Салауат райондары һәм Өфө ҡалаһы ҡабул итә. Башҡортостанға Ҡытай, Көньяҡ Корея, Сербия, Һиндостан, Көньяҡ Африка Республикаһы, Шри-Ланка, Мексика, Иран, Колумбия, Эстония, Ҡаҙағстандан ҡатнашыусылар килеүе көтөлә. Концерттар, милли кейемдәрҙә дефиле, һынлы сәнғәт күргәҙмәләре һәм таныштырыу кистәре ингән үҙенсәлекле программа көтә тамашасыларҙы. Мәҙәни сара 7 июнь Дыуан районында асыла. 8 июнь фестиваль "Кыйғыр юлы" этнофестивале үткән Ҡыйғы районына юллана. Фестиваль эстафетаһын 9 июндә Мәсетле районы ҡабул итә. Унда сит илдән килгән артистар менән төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өзләүселәр конкурсында енеүселәр ҡатнашлығында концерт планлаштырылған. 9 июнь сара сиктәрендә "Һомай" башҡорт милли кейемдәре республика фестивале үтәсәк. 10 июндә ҡунаҡтар "Салауат йыйыны" фольклор байрамында ҡатнаша. 11 июндә Балаҡатай районы рус йырҙары һәм таҡмаҡтары төбәк-ара байрамында ҡаршы ала. Халыҡ-ара кимәлдәге байрам 12 июндә Өфөлә "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә ҙур Гала-концерт менән тамамлана.

# БАЙРАМДЫҢ ДАУАМЫ...

**Өфөлә йәнә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале үтәсәк. 12 июндә "Евразия йөрәге"н "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестиваленең гала-концерты аса. Был проект - Рәсәйҙә халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советы (CIOFF) эгидаһы аҫтында уҙған алты халыҡ-ара фестивалдең береһе.**

"ВДНХ-Экспо" майҙанында Ҡытай, Эстония, Көньяҡ Корея, Сербия, Һиндостан, Көньяҡ-Африка Республикаһы һәм Шри-Ланка коллективтары сығыш яһаясаҡ. Бай йөкмәткеле программа 16 июнгәсә дауам итәсәк, төп саралар Өфө амфитеатрында үтәсәк. 13 июндә Башҡортостан Милли симфоник оркестры (художество етәксеһе - Раушан Яҡупов) өфөләрҙе Симфоник төнгә йыя.14 июндә эстафетаны ике проект дауам итә. Киске сәғәт 7-се яртыла быйылғы миҙгел юбилярлы - Өфө ҡалаһының "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбленең концерты башлана. Киске сәғәт 8-ҙә байрамды "UFA-Kuraifest" дауам итәсәк. Тамашасылар Линар Дәүләтбаев етәкселегендә Башҡортостан милли халыҡ музыка ҡоралдары оркестрының, ҡурайсылар Азат Биксуриндың, Роберт Юлдашевтың һәм Zaibetdin проектының, "Йатаған" этно-төркөмөнөң, Мәскәүҙең "Zaman" төркөмөнөң сығыштарын ҡарай аласаҡ. "UFA-Kuraifest" сиктәрендә Өфө амфитеатры сәхнәһенә 200 кешелек ҡурайсылар ансамбле сығасаҡ.15 июндә киске сәғәт 8-ҙә тамашасыларҙы Икенсе Симфоник төн саҡыра. 16 июндә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале тамамлана. Киске сәғәт 5-тә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры алдындағы майҙанда Башҡортостан халыҡтарының милли костюмдар байрамы башлана. Халыҡ-ара байрам "Этнотөн" менән тамамланасаҡ. Сараны ойоштороусы - Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы булышлығында Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы.

# ТӨНЬЯҠ БАШ ҠАЛАЛА



**Санкт-Петербургтағы Рәсәй этнография музейында башҡорт мәҙәниәте көнө уҙҙы. Сараны Рәсәй этнография музейы, Санкт-Петербургтағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм миграция сәйәсәтен тормошҡа ашырыу комитеты, "Башҡортостан" мәҙәни үҙәге" Санкт-Петербург төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Санкт-Петербургтағы башҡорт милли-мәҙәни автономияһы, "Аманат" башҡорт йәштәре ассоциацияһы, Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы, Санкт-Петербургтың Милләттәр йорто ойоштorҙо.**

Унда Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле, Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Артур Шәйнуров, Санкт-Петербург Хөкүмәтенең Милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм миграция сәйәсәтен тормошҡа ашырыу комитетының милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм дәүләт программаларын координациялау бүлеге белгесе Андрей Фролов, Санкт-Петербургтың Милләттәр йорто директоры Елена Кузнецова, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты вәкиле Алһыу Сирғәлина, рәсми ҡунаҡтар ҡатнашты. Көн дауамында музей залында тыуған төйәгебеҙҙең гүзәллеге, башҡорт халҡының мәҙәниәте хаҡында фильм күрһәтелде, бәйләү, ҡорама ҡорау, сәйлән үреү, сигеү, традицион стилдә сувенирҙар яһау буйынса оҫталыҡ дәрестәре уҙғарылды, музей экспозициялары буйлап экскурсиялар ойоштоҙолдо. Санкт-Петербургтағы "Ирәндек", "Аманат" башҡорт ижади коллективтары, Өфөнән килгән артистар фольклор концерты менән сығыш яһаны. Башҡорт мәҙәниәте көнө барышында шулай уҡ Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы үтте. Унда 178 делегат ҡатнашты. Ҡоролтайҙа Санкт-Петербургтағы башҡорт берекмәләрен берләштереү һәм берҙәм ойошма - Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары конгресын ("Королтай") ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителде. 18 кешенән торған башҡарма комитет, уның аппараты һайланды, резолюция ҡабул ителде. Ҡоролтай рәйесе итеп Шамил Моталов тәғәйенләнде.

# "СЫҢРАУ ТОРНА" ТАҒЫ СӘХНӘЛӘ



**Өфөлә Р. Нуриев исемендәге XXI Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале Лев Степановтың һәм Заһир Исмәғилевтың "Сыңрау торна" милли балеты менән асыла. 23 майҙа фестиваль барышында Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырылған яңыртылған балеттың премьераһы була.**

Яңы сәхнә биҙәлешенең авторы - театрҙың баш рәссамы, Башҡортостандың халыҡ рәссамы профессор Рифҡәт Арыҫланов. Спектаклдә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының төп солистары - Башҡортостандың халыҡ артистары, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Гөлсинә Мәүлекәсова (Зәйтүнгәл), Илдар Маняпов (Йомағол), Сергей Бикбулатов (Арыҫланбай) һәм башҡа артистар сығыш яһай.

"Сыңрау торна" балеты уҙған быуаттың 40-сы йылдарында Лев Степанов менән БАССР-ҙың Сәнғәт эштәре буйынса идаралығы араһындағы килешеү буйынса ижад ителгән. Йәш Заһир Исмәғилев композиторҙың башҡорт фольклоры һорауҙары буйынса консультанты була. Башҡорт легендаларына нигеҙләнгән либретто авторы булып билдәле бейеүсе Фәйзи Ғәскәров сығыш яһай; үҙенең хеҙмәтен ул Зәйтүнгәл партияһын тәүге башҡарыусы Зәйтүнә Насретдиноваға арнаған. Балетты ҡуйыу өсөн Киров исемендәге Ленинград академия опера һәм балет театры (хәҙер - Мария театры) балетмейстеры Нина Анисимова саҡырылған. Уға милли һыҙаттарҙы асырға Фәйзи Ғәскәров менән бергә Йомағол партияһын беренселәрҙән булып башҡарған Хәләф Сафиуллин ярҙам иткән. Премьера БАССР-ҙың 25 йыллыҡ юбилейына бағышланған һәм кисәләр серияһы рәүешендә тормошҡа ашырылған: 1944 йылда театрҙа бер нисә ай буйына балеттың яңы өҙөктәре күрһәтелгән. "Сыңрау торна" балеты Өфө театрының репертуарынан төшкәне юҡ. Балет Мәскәүҙә Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында (1955), Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәте көндәрендә (1997) ҙур уңыш ҡаҙанды. Уның өҙөктәре Бөйөк Британияла, Болгарияла, Польшала, Ҡытайҙа һәм башҡа илдәрҙә күрһәтелде. 1960 йылда Свердловск киностудияһында спектакль буйынса фильм-балет төшөрөлдө.

**"БАШИНФОРМ".**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан - Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (26) дүшәмбе | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 23 (27) шишәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 24 (28) шаршамбы | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 25 (29) кесе йома | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (30) йома | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:01 | 21:31 | 23:01 |
| 27 (1) шәмбе | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 28 (2) йәкшәмбе | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:04 | 21:34 | 23:04 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 май "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**26 май "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.00, 12.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 май "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. Башлана 18.00 16+

**26 май** 27-се ижад миҙгелен ябыу тантанаһы 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 май "Сказка синего моря"** (Б. Ходырев). Башлана 12.00, 14.00 0+

**21 май "Носорог и жирафа"** (Х. Гюнтер). Башлана 12.00, 14.00 0+

### Ҡала мәҙәниәт һарайы

**22 майҙа "Мираҫ"** йыр һәм бейеү фольклор ансамбле сираттағы ижад миҙгелен яба. Быйыл ансамбль ике юбилейын билдәләне: "Мираҫ"тың ойошторолоуына 25 йыл булһа, уның Өфө ҡалаһы ансамбле статусында ижад итеүенә 10 йыл тулды. Был юлы сәхнәлә "Мираҫ" ансамбленең балалар студияһы ла сығыш яһаясаҡ.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ХАЛЫҠ БЕЙЕҮЕ -

## халыҡтың йөрәге ул

**Башҡа бейеү төрҙәренән айырмалы рәүештә, халыҡ бейеүенең бер мөһим тәғәйенләнеше бар, ул халыҡты һаҡлай. Әгәр ҙә халыҡ бейеүе онотолоуға дусар ителһә, халыҡ үҙе лә яйлап юҡҡа сыға, сөнки бейеү - ул халыҡтың күңел хазинаһын, уның донъяға ҡарашын сағылдырыусы ғына түгел, ә рух сығанағы ла. "Дарман" балалар халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе Роберт ХӘМИҘУЛЛИН менән бейеү һәм ансамблдең эшмәкәрлеге хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**



**Бейеү - әлеге көндә иң популяр сәнғәт төрөләр, моғайын. Балалар өсөн бейеү студиялары ла киң таралған күренеш. "Дарман" ансамбленең ижад юлы ҡайһы мәлдән башланғыс ала?**

- Үҙем Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә бейегәндә үк балалар ансамбле төҙөү теләге бар ине. Шамонинола йорт һала башлағас та урындағы мәктәптә түнәрәк астыҡ. Кәләшем Алина Хәмиҙуллина "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамблендә бейей, уның менән кәңәшләштек тә, балалар йыя башланыҡ. Дүрт йыл ваҡыт үтте был ваҡиғаға, тәүҙә бер нисә бала ғына йөрөнө. Финалға үтә алмаһаҡ та, беренсе йылда уҡ "Байыҡ" балалар телевизион конкурсында ҡатнаштыҡ, был беҙҙең өсөн ҙур уныш ине. Хәҙерге көндә 100-гә яҡын бала шөғөлләнә. Теләүселәр шул тиклем күп. Ошо түнәрәктә башланған эшмәкәрлек киңәйеп, хәҙер беҙ "Танцуй" ижади берекмәһе төбәк йәмәғәт ойошмаһы тигән исем аҫтында эшләйбеҙ.

Иғтибар итһәгеҙ, күп кенә балалар ансамблдәрендә башҡорт бейеүҙәре боҙоп ҡуйыла. Йә көйө яңылыш ҡулланыла, йә хәрәкәттәре дөрөҫ түгел, башҡорт характерына тура килмәй. Иң әсендергәне, рух һиҙелмәй. Башҡорт бейеүе минең өсөн, тәү сиратта, рух сығанағы. Шуға ла был эшкә тотонорға булдыҡ та. Ансамблде Шамонинола асыу ныҡ уңышлы булды, сөнки унда башлыса башҡорт ғаиләләре йәшәй. Ҡан хәтере тигән әйбер бар: бейеүҙең бер хәрәкәтен генә күрһәтһән дә башҡорт балаһы уны шунда уҡ отоп ала.

**Балаларҙы йыйыу - бер эш, ансамбле бит матди яҡтан да тәьмин итергә кәрәк. Костюмдар тектереү ҙә ярайһы сығымдар талап итә. Был мәсьәләләрҙе нисек хәл итәһегеҙ?**

- Бөгөнгө көндә бар нәмәне тулыһынса ата-әсәләр көсө менән хәл итәбеҙ. "Дарман" тупланып, бер ғаиләгә әйләнеп бара. Тәүҙә һәр төркөм үҙе өсөн генә тектерһә, хәҙер йыйылышып, тәүҙә бер төркөмгә, унан икенселәренә костюмдар тектерәбеҙ. Бер-беребеҙҙе аңлап эшләргә тырышабыҙ. Ҡуртымға зал алып тороуға ла ярҙам итәләр. Әле бына майҙың 27-һе Өфөгә концерт менән килергә йыйынабыҙ, унда ла ата-әсәләр ярҙам итте. Киске 6-ға бар тамашасыларҙы Балалар филармонияһында көтөп ҡалабыҙ. Репертуарҙа күберәк башҡорт бейеүҙәре, шулай уҡ донъя халыҡтары бейеүҙәрен дә бейейәсәкбеҙ. Ярҙамға ике коллектив киләсәк, Стәрлетамаҡтан "Солнышко", Өфөнән "Эксклюзив" бейеү ансамблдәре лә сығыш яһаясаҡ. Халыҡҡа үҙебеҙҙе күрһәтеп ҡайтырға ниәтләнәбеҙ.

**Халыҡтың холоҡ-ҡылығын бар нескәлегендә тойоп бейеү ижад итеүселәр ҙә, башҡарыусылар ҙа һирәк хәҙер. Бейеүҙәрҙе нисек һайлайһығыҙ?**

- Бейеүҙәрҙе күберәк үҙебеҙ һалабыҙ. Балалар балаларса инде, тиһәләр ҙә, "Дарман" ансамблендә шөғөлләнеүселәрҙең сығышын тамашасылар бик юғары баһалай. Хәрәкәттәрҙе дөрөҫ башҡарыуҙы талап итәбеҙ. Киң таралған бейеүҙәрҙе, мәҫәлән, Фәйзи Ғәскәровтың "Гөлнәзирә"һен репертуарға индерҙек, сөнки уны һәр башҡорт коллективы белергә тейеш, тип иҫәпләйем. Ул бейеү шул тиклем камил, саф башҡортса, унда егеттәрҙең дә, ҡыҙҙарҙың да ҡул хәрәкәттәре лә, аяҡ йөрөштәре лә ҡуйылған. Ул башҡорт бейеүенең нигеҙе, тип әйтергә лә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле күптән түгел генә Мәскәү ҡалаһында йәшәгән милләттәштәребеҙҙең "Алтын Ай" бейеү ансамбле Өфөлә концерт ҡуйып, матур әлгә күрһәткәйне. Уларҙың сығышын "Дарман" халыҡ бейеүҙәре ансамбле әлэктереп алыуы ла матур күренеш булмаҡсы. Иң һөҡландырғаны, был ансамблдәрҙең етәкселәре рухлы һәм илһөйәр башҡорт егеттәре. Уларҙың маҡсаты ла бер - халыҡ бейеүҙәрен һаҡлау, тимәк, халҡыбыҙҙың киләсәген бар итеү. Бәлки, был бейеү марафонына башҡалар ҙа ҡушылыр?**

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

ВИКТОРИНА

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы шағирә Зөһрә Ҡотлогилдинаның "Китап" нәшриәтендә күптән түгел донъя күргән "Ялан сәскәләре" китабы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Зөһрә Ҡотлогилдина һүҙҙәренә Салауат Низаметдинов яҙған беренсе йырҙы атағыҙ.**

а) "Күҙҙәремә ҡара";
б) "Ике йөрәк";
в) "Ялан сәскәләре".

**2. "Ялан сәскәләре" йырын иң тәүге булып кем башҡарған?**

а) Айһылыу Солтанова;
б) Фәнүнә Сиражетдинова;
в) Нәзифә Ҡадирова.

**3. Зөһрә Ҡотлогилдина һүҙҙәренә Салауат Низаметдинов яҙған йырҙарҙы Татарстанда иң күп башҡарыусы артист кем?**

а) Аҫылйәр;
б) Хәниә Фәрхи;
в) Салауат Фәтхетдинов?

Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Зөһрә Ҡотлогилдина үҙенең автографы ҡуйылған "Ялан сәскәләре" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Гөлнур Яҡупованың автографы ҡуйылған "Йыртҡыс ҡаны" китабын Өфө ҡалаһынан Гөлнур Батырова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕРЛЕ КЕШЕ...

## еренә тартыр

Кеше йырын йырлайым, тип, үҙ йырыңды онотма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡ бәхет була алмай. Ҡартлыҡ - тыныслыҡ йә бәлә генә була ала. Уны хөрмәт итһәләр, ҡартлыҡ тыныслыҡ кисерә. Онотһалар һәм яңғыҙлыҡта ҡалдырһалар, ул бәләгә әүерелә.

**(В. Сухомлинский).**

Аҡсаның ылыҡтырғыс тәьҫиренә ҡаршы тора алмағандар бер ваҡытта ла бәхетле була алмай.

**(Демокрит).**

Теләктәр аҙғынлығы беҙгә булғандар менән файҙаланырға ла ҡамасаулай.

**(Плутарх).**

Ҡайһы саҡта беҙ ҡурҡҡан нәмәләр беҙ теләгән һәм ынтылған нәмәләрҙән хәүефһеҙерәк булыуы мөмкин.

**(Д. Коллинз).**

Хыял менән уйнау хәүефле: уның юҡҡа сығыуы бәхетһеҙлеккә әүерелеүе мөмкин; хыял артынан ҡыуып, ғүмерҙе сарыф итеүең йә аҡылһыҙ хыял итеүҙән ғүмерҙе ҡорбан итеүең дә бар.

**(А. Герцен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Кисен батша бер вәзире менән баҡсала йөрөп ята икән. Батша вәзиренә шундай һорау биргән: "Әйт әле, һинеңсә, донъяла иң мөһим кеше - ул кем?" Вәзире хужаһының ни әйтергә теләгәнен шунда уҡ һиҙгән: "Власть боҙа башлаған минең батшамды ла, - тип уйлаған ул. - Моғайын, ул үҙен иң мөһим кеше тип уйлайҙыр. Булмай тор әле..." Шунан ул былай тигән: "Минеңсә, батшам, донъяла иң мөһим кеше - ул сабый бала. Сабыйҙы бер кем дә, хатта һин, батша ла, тотоп тыя алмаясаҡһың". "Нисек инде аҡылһыҙ бер бала барыһынан да мөһимерәк була ала! - тип аптыраған батша. - Иҫбат итеп ҡара әле". "Ярай, иҫбат итермен. Тик уның өсөн ваҡыт кәрәк. Мин һынау үткәрергә тейешмен", - тигән вәзир. Шулай килешкәндәр.**

**Бер нисә көндән вәзир батша һарайына бер шуҡ малайҙы күтәреп килеп ингән. Малай батшаға шунда уҡ оҡшаған. Ул уны алдына ултыртып алып яратҡан, шунан бергәләп уйнай башлағандар. Ә малай шаяра торғас, батшаның һаҡалына йәбешкән һәм уны ебәрмәй, бар көсөнә тарта башлаған. Батша баланың ҡулдарынан көскә ысҡынып, вәзиренә асыуланып әйтә икән: "Һин ниңә был тәртипһеҙ малайҙы алып килдең? Уны тыйып тотоп булмай ҙа баһа!" Вәзиргә ошо һүҙҙәр кәрәк була ла инде: "Бына, күрҙеңме инде, батшам, һиңә башҡа бер кем дә тырнаҡ менән дә ҡағыла алмай, ә был бала һинең һаҡалыңа йәбешеп, бер нисә бөртөгөн өҙөп тә алды хатта. Тимәк, донъяла иң мөһим кеше ул булып сыға инде..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5057
Заказ - 1004/05